ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 ғинуар (һыуығай)

2019

№3 (837)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бүләкләү тураһында... фәлсәфә**



3

**Туған телгә мөнәсәбәт...**

ошо бәйгелә лә һынала



6

**"Ҡуңыр буға" юлында...**

ижадсылар берләшә



11

**Аҡмулланың тура һүҙе...**

берәүгә им, берәүгә ыу



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Эргә-тирәләге таныштарығыҙҙы, туғандарығыҙҙы иҫкәртегеҙсе: 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - һәр айҙың 18-енә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе киләһе айҙан алдыра башлаясаҡтар. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә бер айға яҙылыу хаҡы - 101 һум 66 тин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ярлылыҡ һәм байлыҡ тигән төшөнсәне нисек аңлатырһығыҙ?

***Кадир МӘҒӘФҮРОВ, биолог, иҡтисадсы, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре:*** Был осраҡта мин байлыҡ менән ярлылыҡ төшөнсәләренә билдәләмә биреүҙе кәрәк тапмайым, ә фәҡәт шуны ғына әйткем килә: байлыҡ - ул аҡсалы булыу, хәлле булыуҙы ғына аңлатмай. Беҙҙең халыҡта, мәҫәлән, борон-борондан бай булыу - ул хужа булыу, зирәк аҡылға, эшмәкәрлек сифатларына эйә булыу, эргә-тирәндәгеләр, ҡул аҫтындағылар өсөн яуаплы булыу, шул уҡ ваҡытта абруй һәм халыҡ ихтирамын ҡаҙаныу булараҡ аңлашылған. Боронғо башҡорт ауылдарында ана шундай бер-ике кеше булған һәм улар бөтөн ауылды тотоп торған. Ауылдың ярлы тигәндәренең дә аты, һыйыры, ваҡ малы булған, ә инде бөтөнләй фәҡирлек сигендә йәшәгән бер-ике кеше булған икән, улары, тимәк, ялҡаулығы арҡаһында шулай көн күргән. Ләкин бай хужа ундайҙарға ла ҡул ҡаушырып ятырға ирек ҡуймаған: һауып эсергә һыйырын биреп ҡуйған. Ҡарап, бесән эшләп, имен быҙаулатып алһа, быҙауҙы ярлы бөтөнләйгә үҙендә ҡалдыра алған. Унан һуң бит башҡорт аҫаба халыҡ булараҡ, мал-тыуар аҫрап ҡына көн күрмәгән, ер эшкәртеп, бойҙайын, арышын, хатта тарыһына тиклем сәскән - игенселек менән шөғөлләнгән. Беҙҙең ауылдарҙа бөгөн дә юҡ ул ярлылар һәм фәҡирҙәр. Ә инде бер-ике кеше бар икән - тимәк, улар эскесе йә ғәриптәр. Ауыл халҡы бына тигән итеп йәшәп ята: мал, ҡош-ҡорт аҫрай, әле бына геү килешеп һуғым һуя, бер-берейһен ҡунаҡҡа саҡырыша... Иң мөһиме - халҡыбыҙҙың күңел донъяһы, рухы бай, ә быңдай ҡәүем бер ваҡытта ла меҫкен, фәҡир хәленә төшмәйәсәк. Тыуған еренә ерегеп, тауын, һыуын, урмандарын ҡәҙерләп, уларҙы яман күҙҙәрҙән һаҡлап йәшәгән ябай халыҡ өсөн ана шуларҙан да ҡәҙерлерәк хазина юҡтыр ул.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# МАТЕМАТИКАҒА ҺӨЙӨҮ ҘӘ...

## йырға һөйөү ҙә - күңелдә

**Яңы йыл алды көндәрендә бөтөн Башҡортостан халҡы Рәсәйҙең Беренсе каналында барған "Голос. Перезагрузка" конкурсының финалына сыҡҡан һылыуыбыҙ Рушана ВӘЛИЕВА өсөн көйҙө. Барлыҡ социаль селтәрҙәргә талантлы яҡташыбыҙҙы күтәрмәләгән СМС-хәбәр ебәреү тураһында саҡырыуҙар таратылды, хатта Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та "Бәйләнештә" селтәрендәгеләрҙе Рушана өсөн тауыш бирергә саҡырҙы. Ошо берҙәмлек Рушанаға конкурстың иң шәп өс йырсыһы исемлегенә инергә ярҙам итте. Нәҙәкәтле, шишмәләй сылтырауыҡлы тауышҡа эйә яҡташыбыҙ менән тыуған төйәгенә ҡыҫҡа ғына ҡышҡы ялға ҡайтҡан мәлендә әңгәмә ҡороп өлгөрҙөк.**

**Был проектта ҡатнашыусыларға бик ҙур талаптар ҡуйыла, уларға яуап биреү өсөн нисек әҙерләндең?**

- "Голос" проектына өсөнсө тапҡыр килеүем, иң башта балалар араһындағы тәүге ярышта көсөмдө һынап ҡарағайным. Унда минең тауышҡа остаздар әйләнмәне, икенсе юлы ла үтмәнем. Былтыр өлкәндәр араһындағы конкурстың һайлап алыу туры башланыуын күреп, Мәскәүҙәмен бит, ни өсөн тағы берҙе үҙемде һынап ҡарамаҫҡа, тип уйланым да, заявка ебәрҙем. Алдағы йылдарҙа уңышҡа өлгәшә алмауым күңелемә ятмаған йырҙарҙы башҡарыуыма бәйле булғандыр, тип уйлайым. Шуға күрә был юлы күптән яратып башҡарған украин телендәге "Вәғәҙә бир миңә" тигән йырҙы ижадташым Евгений менән йырланыҡ. "Голос" проектында уңышлы сығыш яһау өсөн, ысынлап та, үҙ-үҙеңә тоғро булырға кәрәк икән. Рәсәйҙә моңло тауышлы, талантлы йырсылар бик күп һәм ундай оҫталарҙан ҡалышмай сығыш яһауы еңелдән түгел. Остаздар иртәнән кискә тиклем меңәрләгән конкурсантты тыңлап, ялҡып та китәлер, шуға күрә, ниндәйҙер үҙенсәлекле, таң ҡалдырырлыҡ сығыш әҙерләргә кәрәк ине. Был йәһәттән, Евгений менән сығышыбыҙ бик отошло килеп сыҡты, ханг тигән музыкаль инструмент остаздарҙың күңел ҡылдарын сиртте...

(Дауамы 16-сы биттә).




12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Радий Фәрит улы Хәбиров Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнгәс тә, бөтә етәкселәрҙе лә халыҡ менән бергә булырға, күтәрелгән проблемаларҙы ваҡытында хәл итергә саҡырҙы. Уның күрһәтмәһе буйынса, элек 30 көн эсендә ҡаралырға тейеш булған мәсьәләләр хәҙер 24 сәғәт ваҡыт арауығында тикшерелеп, мөрәжәғәт итеүсегә аныҡ яуап бирелергә, ә 8 көн эсендә проблема ыңғай хәл ителеп, башҡарылған эш тураһында фотоотчет ебәрелергә тейеш. Бындай күрһәтмә тормошоболоҙҙо төптән үҙгәртер, ябай халыҡ менән чиновниктар араһында файҙалы бәйләнеш булдырыр һәм, иң мөһиме, күптәрҙең йылдар буйы хәл итә алмаған проблемаларын сисергә ярҙам итер, тигән ышаныс бирә. Белорет районынан әүҙем йәмәғәтсе элекке металлург Риф Шакиров Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улының ошондай эш алымдарын хуплап, түбәндәге фекере менән уртаҡлашты.**

# ИШЕТМӘЙҘӘР...

- Радий Хәбировтың дилбегәне ныҡлап ҡулға алыуы, бер генә өлкәне лә күҙ уңынан ысҡындырмай, эшкә ныҡлап тотоноуы ҡыуандыра. Уға ошо йүнәлешен тайпылмай, артабан да уңышлы ғына эшләргә яҙһын. Уның халыҡтың үтенес, һорауҙарын аныҡ ваҡыт эсендә тикшереп, уларға аныҡ яуап бирергә ҡушыуы ла күңелдә ышаныс уята, сөнки төрлө проблемалар буйынса етәкселәргә йыш мөрәжәғәт итәбеҙ. Үкенескә ҡаршы, уларҙың ҡайһы берҙәрен хәл итеү өсөн кәрәкле тупһаларҙы күп тапарға тура килә. Мәсәлән, беҙҙең бер нисә кешенән торған инициатив төркөм инде бына ике йыл Белорет ҡалаһының Үкшүк биҫтәһендәге мосолман зыяратын кәртәләү, унда автобус маршруты астырыу өсөн тырыша. Башта, йәғни 2017 йылдың ноябрь уртаһында, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллинаның ҡабул итеүенә барып, проблеманы аңлаттыҡ. Күтәрелгән мәсьәлә буйынса оҙаҡ ҡына яуап булмағас, 2018 йылдың 11 ғинуарында муниципаль район хакимиәте башлығына мөрәжәғәт иттек. Ул тейешле етәкселәр менән һөйләшеп, мәсьәләне хәл итәсәген белдерҙе. Күпмелер ваҡыттан һуң зыярат кәртәләнгән, проблема хәл ителгән, тигән яуап алдыҡ, әммә ул дөрөҫлөккә тап килеп етмәй ине. Яҡынан зыяратҡа барып тикшереп ҡарағас, эштең арлы-бирле, исем өсөн генә эшләнеүе, хакимиәт башлығына дөрөҫ мәғлүмәт бирелмәүе асыҡланды. Эш һөҙөмтәһен фотоға төшөрөп, тағы ла етәкселәр тупһаһын тапай башланыҡ. 18 мартта Зөһрә Рәхмәтуллина тағы ла халыҡты ҡабул итте. Беҙ, яуап ҡәнәғәтләндермәй, тип, уның исеменә икенсе хат тотоп барҙыҡ. Депутат хәлде үҙ контроленә алды. Апрель аҙаҡтарында 18 майға тиклем аныҡ яуап вәғәҙәләгән хат килде. Әммә яуап һаман да юҡ әле. Башлаған эште аҙағына еткереү өсөн ярты юлда туҡтап ҡалманыҡ, 13 ноябрь Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Андрей Иванович Лавреновтың ҡабул итеүенә барҙыҡ, ул да бер аҙна ваҡыт эсендә аныҡ яуап бирермен тип ышандырҙы, көтәбеҙ әле.

Беҙ хаҡлы ялда булғас, дөйөм проблемалар буйынса йөрөргә лә ваҡыт бүлә алабыҙ. Ә бит етәксегә мөрәжәғәт итеп тә, ҡәнәғәтләнерлек яуап алмаған осраҡта, башҡа ишектәрҙе лә ҡағырға тура килә. Түҙемлеге етмәй, башланған эште ярты юлда ташлап ҡуйыусылар ҙа була. Хакимиәт башлығы бар эште лә үҙе барып эшләп, йәки эшләгәндәрен күҙәтеп тора алмай. Уның күрһәтмәһенең үтәлеше өсөн ошо йүнәлештәге етәкселәр яуап тота. Шуға күрә, Радий Фәрит улының башҡарылған эш буйынса фотоотчет бирергә ҡушыуы хакимиәт башлығына ла хәлде дөрөҫ контролдә тоторға, проблеманы тиҙ арала ыңғай хәл итергә ярҙам итәсәк, тип уйлайым.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА** яҙып алды.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ярлылыҡ һәм байлыҡ тигән төшөнсәне нисек аңлатырһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).



***Фирүзә ИШБИРҘИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, хеҙмәт ветераны:*** Был һорауға яуапты беҙҙең халыҡ ҡына бирә ала инде ул, үҙ тәжрибәһенән сығып. Ярлылыҡ тураһында, әлбиттә, сөнки байлыҡтың ни икәне беҙҙең төшкә лә ингәне юҡ, шулай булғас, ул хаҡта нисек әйтәһең... Ярлылыҡ Хоҙай тарафынан беҙҙе хәрәмдән, гонаһтан ҡурсылау өсөн бирелгәндер ул, һабаҡ йә ғибрәт булараҡ, тип уйлайым, юғиһә, әҙәм балаһы байыһа, Аллаһы онота, хаттин ашып шаша бит: типтереп йәшәй башлай, аҡсаһан башҡа нәмә күҙенә күренмәй - бөтөн нәмәне һатып ала. Шул иҫәптән, закон "хужаларын" да, сит илдәрҙән зиннәтле һарайҙар, диңгеҙ буйҙары, утрауҙарҙан - коттедждар, яхта, самолет, сибәр ҡыҙҙар һәм башҡа күп нәмәләрҙе. Тик был донъяла хатта аҡсаға ла һатып ала алмаған нәмәләр бар икәнен ул белмәй: выждан, намыҫ, изгелек кеүек төшөнсәләр улар күңеленән аҡса тарафынан ҡыҫырыҡлап сығарыла, аҙаҡ тамам онотола. Шуның өсөн дә байлыҡты ла Аллаһы Тәғәлә бәғзе берәүҙәргә һынау өсөн бирәлер, тип уйлайым. Байығыуҙың ике төрө бар: урлап, алдап; икенсеһе - үҙенең хәләл көсө менән тир түгеп. Тәүгеләренән шуларҙың изгелек көтөргә түгел, улар, ғәҙәттә, капиталдарын сит ил банктарында һаҡлай. Шулай итеп, байлыҡтарының бер тине лә ил файҙаһына түгел. Ә бына икенсе төркөм хәллеләр хаҡында уйлағанда, биш йыл буйы яман сирле балаларға йәмғеһе 10 миллионға яҡын аҡса күсереп барған "Локомотив" хоккейсыһы Иван Ткаченко күҙ алдыма килеп баҫа. Хатта ул командаһы менән бергә Ярославль күгендә авиаһәләкәткә осраҙан бер нисә минут алда ғына ла 16 йәшлек сирле ҡыҙға 500 мең күсереп өлгөргән була. Был ниндәйҙер феномен, минеңсә. Бындай әскерһеҙ изгелекте аңлауы ла ҡыйын хатта. Ә нинә һуң Иванға яуған сауаптар (уның хәйриәлек итеүе хаҡында берәү ҙә, хатта сирле балалар ҙа белмәгән) уның үҙен дә, иптәштәрен дә ҡотҡармаған? Иткән изгелеге өсөн кеше бер ниндәй ҙә хаҡ там итергә тейеш түгел, әлбиттә. Яҡшы кеше Аллаһтың Үҙенә лә кәрәк, тиҙәр бындай осраҡта. Ә, бәлки, байҙарҙы изгелек эшләүҙең килемһеҙ, үҙҙәре өсөн "файҙаһыҙ" булыуы өркөтәлер? Дөрөҫөн әйткәндә, байлыҡ һәм ярлылыҡ төшөнсәләре йәмғиәттәге аҡса, тәбиғи ресурстар, күсемһеҙ милек, власть һәм башҡа өҫтөнлөктәрҙең тигеҙ һәм ғәҙел бүленмәүенән килеп сыҡҡан ҡапма-ҡаршылыҡ. Рәсәйҙә бындай тигеҙһеҙлек айырыуса ярылып ята, сөнки байҙар менән ярлылар араһы төньяҡ менән көньяҡ ҡотоп араһылай, бер-береһенән алыҫлаша ғына бара. Үҙәк матбуғат был хаҡта яңыраҡ ҡына "Рәсәйҙә бөгөн байҙар - ярлылыр ҡатламына бүленеш 1905 йылғы революция алдынан булған кимәлгә етте", тип яҙып сыҡты хатта ("КП",07.12.2018). "Беҙҙең" байҙар үткән быуаттың сыуалышлы буйрағында ил байлығын бүлешеп, кемуҙарҙан бына тигән "суртандар" эләктереп ҡалдылар ҙа, шуның менән байыны ла киттеләр, ә бер ҙә ҡара тирҙәрен һыпырып түгел. Рәсәйҙең милли, халыҡ байлығы шулай итеп аңһат ҡына шәхси ҡулдарға күсте лә ҡуйҙы. Ә ябай халыҡҡа "приватизация чегы" тигән ҡағыҙ кисәге тотторҙолар ҙа, шуның менән һәмәйтте лә ҡуйҙылар. Унаһын аҙаҡ кемеһе - араҡыға, кемеһе - быймаға алыштырҙы, арзан хаҡҡа муттарға ла тотторop ебәрҙеләр, ләкин бер кем дә байыманы... Шул йылдарҙан мандый алмаған ярлылыр армияһы Рәсәйҙә бөгөн 20 миллиондан артып киткән, тиҙәр. Бына шул була инде байлыҡ менән ярлылыҡтың иң сағыу классик миҫалы. Шуға күрә лә беҙҙең илдә коррупция көслө, сөнки халыҡ аңында "Урлаһаң - байыйһың" тигән "хәҡиҡәт" нығынып ҡалған. Урлап, талап, алдап байыу - бик ҙур гөйеп һәм гонаһ, ә ярлы булыу - ул гәйеп түгел, сөнки ярлы хәләл көсө менән йән аҫрай, ғаиләһен ҡарай - тимәк, ул ярлы булған хәлдә лә, фәҡир түгел, үҙ көнөн күрерлек хәле, дарманы бар, ҡулдары эш белә. Ярлының, ғәҙәттә, күңеле бай була: ул кеше хәлен аңлай, уртаҡлаша, бүлешә белә. Ә бай, ғәҙәттә, ҡомһоҙ, һаран, күңеле фәҡир була; ундайҙар нәфсеһенә баш була алмай, байлығы өсөн ҡурҡып, ҡалтырап йәшәй. Ахырҙа, артыҡ байлыҡ ҡасан да булһа ул кешегә ҙур бәләгә әүерелә. Байлыҡ - нәфсе сире ул, дауалап булмай торған күңел сире...

***Рәүеф БИКТАШЕВ, педагог, хеҙмәт ветераны:*** Беҙҙең илдә матди тәьминәт, эш хаҡы йәһәтенән уҡытыусы халҡын ярлы йә уртаса ҡатлам тип әйтергә булһа ла, рухи һәм күңел дәрәжәһе яғынан иң бай кеше - ул барыбер уҡытыусы, тип әйтер инем мин. Сөнки, берҙән, ул белемгә, мәғлүмәткә бай; ғүмере буйына нисәмә йөҙләгән бала уның ҡулы аша үтә, белем ала, унан һуң , был балалар үҫеп етеп, үҙаллы тормош юлына баҫҡас та ғүмерҙәре буйы ошо уҡытыусыһы образын ҡәҙерләп күңел түрендә һаҡлаясаҡ. Ҡатыным Әминә Вәли ҡыҙы менән беҙҙең дә уҡыусыларыбыҙҙың иҫәбе-һанына сығырлыҡ түгел. Иң ҙур байлығыбыҙ - шулай уҡ үҙебеҙ тәрбиәләп үҫтергән сәскә кеүек ҡыҙҙарыбыҙ, уларҙан ҡала кейәүҙәребеҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ, бүлә-бүләсәрҙәребеҙ... Тимәк, иң бай кешеләр, ысынлап та, беҙ булып сығабыҙ түгелме?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** яҙып алды.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Ростов өлкәһе губернаторы Василий Голубев исеменә телеграмма ебәрҙе. Унда Радий Хәбиров 14 ғинуарҙа Шахты ҡалаһында булған фажиғәгә бәйле ҡайғы уртаҡлашыу белдерә. Дүшәмбе Ростов өлкәһе Шахты ҡалаһындағы күп ҡатлы йортта көнкүреш газы шартланы. Һигеҙенсе һәм туғыҙынсы ҡаттар өлөшләтә емерелде: 16 фатир зыян күрҙе. Емереклектәр аҫтында биш кешенең йәнһеҙ кәүҙәһе табылды. Ете кеше ҡотҡарылды.

✓ Башҡортостанда эшһеҙлек пособиеһының уртаса күләме декабрҙә 4 073 һум йәки эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 42,9 процент тәшкил итте. Хеҙмәт министрлығының 2018 йылдың 1 декабренә мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда "рәсми" эшһеҙҙәр һаны яҡынса 18,5 мең кеше булған. Ә Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы методологияһы буйынса республикала эшһеҙҙәр һаны 94 мең кешенән ашҡан. Мәшғүл халыҡ һаны 1 миллион 860 мең кешенән ашыуыраҡ булған.

✓ 2018 йылда Башҡортостандан рөхсәтһеҙ йәшәгән 601 мигрант үҙ иленә оҙатылған, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Федераль суд приставтары хеҙмәтенең республика буйынса идаралығында. Улар Рәсәйгә 5 йылдан һуң ғына килә ала. Әлеге ваҡытта тағы 32 кеше административ тотолған сит ил кешеләре өсөн махсус учреждениела. Былтыр республикандың суд приставтары рөхсәтһеҙ килгән мигранттарҙы эшкә алған һәм торлаҡ биргән граждандарҙан һәм ойошмаларҙан уларҙы Рәсәйҙән оҙатыуға бәйле 300 мең һумға яҡын аҡса түләттергән.

✓ Хеҙмәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда яңы йылдан күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау өсөн түләүҙе компенсациялау 70 йәшкә еткән, янғыҙ йәки эшләмәгән пенсия алды йәшендәге граждандарға (ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 55 йәш, ир-егеттәргә 60 йәш) йә булмаһа I һәм II төркөм инвалидтары ғаиләһендә йәшәгән милек эйәләренә ҡағыла. 70 йәшкә еткән граждандарға - 50 процент , 80 йәше тулғандарға 100 процентлыҡ компенсация ҡаралған.

**"БАШИНФОРМ"** материалдары ҡулланылды.

✓ *Үҙенең белем кимәленә, тәжрибәһенә ярашлы, доктор барлыҡ пациенттарға ла бер үк мөнәсәбәт күрһәтә. Бүләк бирҙе, йә бирмәне, тип, теге йәки быныһын айырып тормай.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БҮЛӘКЛӘҮ ТУРАҺЫНДА... ФӘЛСӘФӘ

**Гәзитебеҙҙең 2-се һанында Фәрзәнә Илбаеваның "Сәскәләр һәм... башҡалар" исемле мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, мин дә ана шундағы күтәрелгән мәсьәләгә ҡарата үҙемдең фекерем менән бүлешмәксе булдым. Һүҙ уҡытыусы һәм табип халҡына бүләк биреү-бирмәү тураһында бара. Билдәләнеүенсә, элегерәк уларға 3 мең һумлыҡтан ҡиммәтерәк бүләк алыу тыйылған булһа, Дәүләт Думаһы ҡарауына тәҡдим ителгән яңы закон проектында ошо категорияға тик сәскә гөлләмәһе генә бүләк итеүгә рөхсәт буласаҡ...**



Инде нисәмә йылдар отставкала булыуыма ҡарамаҫтан, ҡасандыр хәрби табип булып эшләгән кеше булараҡ, ошо мәсьәләгә ҡарашымды табип күҙлегенән сығып сағылдырырға ниәтләйем. Юморға бай булған бәғзе докторҙарҙан "Бушлай дауаланыу ул - бушҡа дауаланыу" (Лечиться даром - даром лечиться) тигән мәҙәк бер әйтемде ишеткәнем бар. Үҙебеҙҙең госпиталдә бергә хеҙмәт итеп йөрөгән хирургтар минә бүсер (грыжа) сәбәпле операция яһағандан һуң, ана шулай тип шаярҡайнылар. Хатта һуңынан улар менән ординаторскийҙа бергәләшеп ултырып сәй ҙә эстек... Егеттәр минән, үҙенең коллегаһынан низер талап итмәгәнен яҡшы аңлайым, әлбиттә. Күпмелер ваҡыттан уларҙың да кемеһененДер минең "скальпель аҫтына ятыуы" ихтимал бит (һәм шулай булғыланы ла). Тағы шуны әйтеп киткем килә: тиҫтәләгән йылдар дауалау учреждениеһының эсендә докторҙар менән бергә ҡайнашып йөрөүемә лә ҡарамаҫтан, кемдәлер дауалау өсөн хирургтың бүләк һорағаны хаҡында аныҡ миҫалдар белмәйем. Уның ҡарауы, пациенттарҙың үҙҙәренең докторға көсләшеп тигәндәй низер "төртөүе" менән яҡшы танышмын. Бер мәл (әле Советтар Союзы тарҡалмаған осор) рядовой Алиевтың кинәт кенә тауышы бөттө. Тейешенсә тикшереүҙәр үткәргәс, был һалдаттың һап-һау икәнен асыҡланыҡ, тик егетебеҙҙең тауышы ғына сыҡмай. Һәр саҡ шыбырҙап ҡына һөйләшкән һалдатты госпиталдән сығарып ебәреп тә булмай... Бер көн, алыҫ республикала йәшәүенә ҡарамаҫтан, уның әсәһе килде. Улының хәлен асыҡ ҡына итеп һөйләп бирҙем, әммә әсә кеше гәзизен табиптар аша, һаулығы буйынса демобилизациялатып, өйөнә алып ҡайтып китергә көйләнгән ине. "Булмай, - тинем аныҡ ҡына итеп, - улығыҙ - һап-һау!" "Ярай, ни хәл итәһең. Әле һеҙгә тағы инеп сығырға булалыр ул, иптәш доктор?" - ти был. "Инегеҙ, әлбиттә", - тинем. Шунан был ҡатын минең "ай-вай"ыма ҡарамай, гәзиткә төрөлгән кәнфит ҡумтаһын өҫтәлемә ҡалдырып сығып китте. Ул сығып китеү менән, ҡыҙыҡһынып, төргәкте астым. Ҡараһам - унда кәнфит ҡабынан тыш, бер конверт та бар ине. Хат яҙған, ахырыһы... Әммә конверт эсендә бер ниндәй ҙә хат юҡ, ә күпмелер сумма аҡса! Әлдә ваҡытында асып ҡарағанмын, ауыҙыңа май булғыры! Конвертты тотоп, тышҡа сығып йүгерҙем. Әмәлгә ҡалғандай, әлеге апайҙы ҡыуып еттем. Уға ни әйткәнемде аныҡ ҡына хәтерләмәйем, әммә уны ярайһы ғына ныҡ әрләнем. "...Ваш этот поступок я воспринимаю как оскорбление коммуниста, офицера, врача, который давал клятву Гиппократа!" - тигән һымағыраҡ, юғары тонда һөйләшергә мәжбүр булдым һалдат әсәһе менән. Ул ҡатын башҡаса минә мөрәжәғәт итмәне. Әммә һаман да тауышы сыҡмаған был егетте артабан да тикшерергә ниәтләп - Мәскәүгә ебәрергә ҡарар иттем. Баш ҡалалағы Үҙәк госпиталдә уның менән нисек һөйләшкәндәрен белмәйем (бындай осраҡта, гәзәттә, һалдат менән әңгәмәгә хәрби прокурорҙы саҡырталар), әммә часына әйләнеп ҡайтҡанда Алиев һин дә-мин тауышланып һөйләшә ине... Ошо хәлдә ни өсөн оҙаҡ итеп һөйләй икән, тип гәжәпләнеүселәр ҙә булыуы мөмкин. Был - табипҡа ришүәт биреп, уны асыҡтан-асыҡ енәйәт юлына этәрергә маташыу миҫалы.

Бәғзе берәүҙәргә ниндәйҙер операция яһап, һауыҡтырып сығарғас, һуңынан килеп шәфҡәт туташы аша (минең үҙемдең алырға яратмағанымды ишетеп беләләр, күрәһең) кәнфит-мәҙәр ҡалдырып киткеләү осраҡтары ла булманы түгел. "Ҡалдырып киткән күстәнәсте ҡый йәшнигенә ташлай торғайным", - тиһәң, әлбиттә, бер кемдең дә ышанмаҫы билдәле. Дөрөҫөн әйткәндә, кәнфитте ни сәйгә ҡушып эсәһең дә ҡуяһың инде ул. Ә бына коньяк һымағыраҡ "шайтан эсемлеген", ышанаһығыҙмы-юҡмы, асып та тормайынса ватҡылағаным булды.

Үҙен, ҡатынын йә иһә балаһын уңышлы дауалаған өсөн хатта бәғзе бер юғары чинлы начальниктарҙың да "Доктор, это тебе за твои золотые руки", тип, бүләк алып килгеләүҙәре бер кем өсөн дә сер түгел. Ундай күстәнәстәрҙең хаҡы хәҙерге 3 мең һум суммаға етмәгәндер, әлбиттә, әммә һәр бүләкләүҙән унайһыҙлыҡ тойғоһо кисерә инем. Ныҡлы инаныуымса, күпселек табиптар, уҡыу йортон тамамлағандан һуң, Гиппократ антына тоғро булып, кешеләргә намыҫлы хеҙмәт итеүгә көйләнеп эш башлай. Пациентының һауыҡып китеүе - улар өсөн иң яҡшы бүләк! Үҙенең белем кимәленә, тәжрибәһенә ярашлы, доктор барлыҡ пациенттарға ла бер үк мөнәсәбәт күрһәтә. Бүләк бирҙе, йә бирмәне, тип, теге йәки быныһын айырып тормай. Докторға күстәнәс һатып алып биреү менән ул барыбер үҙенән бейегерәк һикерә алмай. Дауалау нәтижәһе шулай уҡ буласаҡ. Икенсенән, пациент бүләк бирһә, һәр табип, алдараҡ әйтмешләй, үҙенән үҙе оялып, уны выҙданы ғазаплап башлай (рустар әйтмешләй, "Чувствует себя не в своей тарелке").

Алып килгән кәнфит-мәнфиттән врачтың ҡырҡа баш тартыуын яңылыш аңлаусы ауырыуҙар ҙа була. "Доктор үҙенең һәләтенә, көсөнә ышанып етмәй. Һине уңышлы дауалай алыуына икеләнгән өсөн дә бүләк алмай ул..." - тигәнерәк фекер ҙә ишеткәнем бар. Кустәнәстән ҡәтғи баш тартҡан табипты бәғзе берәүҙәр "тупаҫ, ҡырыҫ врач", тип атай башлай. Әҙәм балаһының һәммәһенә лә ярау ифрат ауыр. Ана шундай "рәхмәтле" пациенттар доктор халҡын үҙҙәре үк бүләк алыуға этәрә. Ә инде нәфсеәре бер аҙ бушағыраҡтарға быныһ "өкшап ҡалыуы" һәм уға "күнегеп" китеүҙәре лә бар бит. Хатта әүҙем рәүештә үҙҙәре үк бүләк һорағандар булыуы хаҡында ла ишетелә ҡайсаҡ. Был донъяның кеме юҡ... Фәрзәнә һылыу әйтмешләй, утһыҙ төтөн булмай...

Шуға күрә, хөрмәтле дуҫтар, иң яҡшыһы - дауаланып бөткәндән һуң, һинең өсөн, бәлки, йоҡоһоҙ төндәр үткәргән, әллә күпме борсолған докторҙың бүлмәһенә инеп, уға рәхмәт әйтеп кенә сығыу кәрәк (хатта быны мотлаҡ тип һанайым). Үҙегеҙҙе дауалаусы табипты унайһыҙ хәлгә ҡалдырмайым тиһәгеҙ, уға ана шул етә. Ә инде бик тә бик бүләк биргегеҙ килһә (айырыуса, әгәр табип ҡатын-ҡыҙ икән), уға сәскә бүләк итеүҙән бер ниндәй ҙә зыян булмаҫ, тип уйлайым. Шулай уҡ башҡа ваҡытта урамда осратһаң, был табип менән исәнләшеп йөрөргә онотмау кәрәктер. Тағы бер кәңәш. Ана шул фәлән табип үҙенең йомошо менән һеҙҙең ниндәйҙер үтәгән вазифағыҙға, һөнәрегеҙгә ярашлы, эшегеҙ урынына мөрәжәғәт итте икән, уға, әлбиттә, тейешенсә иғтибар бүлеп, мөмкин тиклем яғымлылыҡ күрһәтеүегеҙ зарур. Докторға башҡа нәмә кәрәкмәй.

Ниндәйҙер сәбәп менән минең бүлегемдә дауаланып сыҡҡан бер прапорщикты хәтерләйем. Сығыр алдынан: "Доктор, рәхмәт. Мин теле-радио аппаратура йүнәтә беләм. Берәй проблемағыҙ булһа, килегеҙ", - тине. Күпмелер ваҡыттан, ысынлап та, уға йомошом төштө. Телевизорымды йәһәт кенә көйләп бирҙе ул, һәм шунда уҡ: "Доктор, с тебя - пузырь (шешә)", - тип, эшенең хаҡын билдәләп тә ҡуйҙы. Шешә биреүен бирҙем уға, тик был кешегә ҡарата, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, әллә ни хөрмәт тойғоһо уянманы. Әммә шундайҙар ҙа бар: әллә ҡасан һиндә уңышлы дауаланған бәғзе берәү ошо көнгәсә, айын тура килтереп, таныштары йә туғандары аша һиңә кустәнәс ебәргәләй. Бүләк алыуҙы закон ярҙамында тыймаған хәлдә лә, ана шундай һәр осраҡ доктор өсөн ифрат уңайһы-ы-ыҙ...

Уҡытыусы һәм табипҡа юғары талаптар ҡуйыу кәрәк, әлбиттә. Әммә, бындай һөнәрҙе хөкүмәткә килем килтермәгән (непроизводственная) өлкәгә, йәғни хеҙмәтләндереү өлкәһенә генә тиңләп, уларҙан эш хаҡын йәлләү ярамай, тигән дә инаныуҙамын. Һәр пациенттың һаулығы өсөн етди борсолған, шунын өсөн иртә сәстәре ағарған табип халҡының, шулай уҡ уҡыусы балалар менән ярты ғүмерен үткәреп, әллә күпме нервы күҙәнәктәрен сарыф иткән уҡытыусыларҙың эше хөкүмәт тарафынан лайыҡлы баһаланырға тейеш. Һуңғы осорҙары, ҡаҙнаның мөмкинлегенә ярҡлы, ошо төр һөнәрмәндәргә яҡшыраҡ ҡарай башланылар ҙа, буғай. Ә инде милләттәштәремә әйтер һүҙем шул: уҡытыусы, табип һымаҡ юғары исем йөрөткән һөнәр эйәләрен үҙегеҙҙең "кустәнәстәрегеҙ" менән кәмһетеп, уларҙы бимазалап йөрөмәһәгеҙ, бигерәк тә хәйерлерәк булыр.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөлә "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектын тормошҡа ашырыу барышында балалар онкология үҙәге төҙөү күҙаллана. Был хаҡта Милли медицина палатаһы ойоштorған түңәрәк өҫтәлдә Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин белдерҙе. Министр һүҙҙәренсә, Туймазыла һәм Дүртөйлөлә сменаһына 300 һәм 200 кешене ҡабул итерлек яңы балалар поликлиникалары һалына. Шулай уҡ Республика балалар клиник дауаханаһы поликлиникаһын һәм хирургия корпусын капиталь төҙөкләндереү тамамланырға тейеш.

✓ Стәрлетамаҡтың Ленин урамындағы 34а йортонда гәҙәттән тыш хәл булған: фатирҙар кранынан зәңгәр төҫтәге һыу аҡҡан. Шыйыҡлыҡ машина йыуҙыра торған тосол төҫөнә оҡшаған. Бындай хәл быға тиклем башҡа йорттарҙа ла күҙәтелгән. Урындағы идара итеүсе компания хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, улар был хәлгә асыҡлыҡ индереүҙе һорап, тейешле органдарға мөрәжәғәт иткән.

✓ 24-26 ғинуарҙа Бөрө ҡалаһында "Керәшен һыуыҡтары - 2019" төбәк-ара эстрада йыры һәм бейеү фестиваль-конкурсы Башҡортостанда конкурс миҙгелен аса. Ғаризалар kresh-morozy2019@mail.ru, gukrcnt@mail.ru электрон адресына 2019 йылдың 23 ғинуарына тиклем ҡабул ителә. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8 (347) 289-66-96, 8-905-355-44-20.

✓ Бангкокта бадминтон буйынса Донъя туры этабында Рәсәй йыйылмаһы составында Башҡортостан спорты тәрбиәләнеүселәре - Алина Дәүләтова һәм Родион Алимов сығыш яһаны. Ҡатын-ҡыҙҙар парлы разрядында бронза миҙалды рәсәйҙәр Екатерина Болотова һәм Алина Дәүләтова алды, тип хәбәр иттеләр республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓ Хеҙмәт министрлығы "инвалидтар" һүҙен ҡулланыуҙан баш тартырға һәм уны нейтраль термин менән алмаштырырға тәҡдим итә. Чиновниктар "инвалидтар" термины иҫкерген тип иҫәпләй һәм уның урынына "махсус ихтыяжлы кешеләр" һүҙбәйләнешен ҡулланырға кәрәк тигән тәҡдим индерә. Ведомство ошондай тәҡдим менән Федераль медик-социаль экспертизаһына мөрәжәғәт итергә ниәтләй. Шулай уҡ мәсьәләне инвалидтарҙың йәмәғәт ойошмалары менән тикшереү ҡаралған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары ҡулланылды.**

✓ **2015 йылдан бөгөнгә тиклем республикала тыуған һәм унан күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән 28 ғаилә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алды. Ошо маҡсатҡа бюджеттан 17,7 миллион һум бүленде.**



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАҢ КҮП БУЛҺА...

**Башҡортостанда 8 бала тәрбиәләгән ғаиләләргә 600 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған пособие түләнә.** Быйыл ноябрҙә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай "Башҡортостан Республикаһында күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерҙе. Булып үткән БР Хөкүмәте президиумы ултырышында ошондай ғаиләләргә аҡса түләү тәртибе һәм уның суммаһы билдәләнгән ҡарар ҡабул ителде. "Бер тапҡыр бирелә торған түләүгә йыллыҡ сығымдар, уны алыусыларҙың артыуы менән бәйле, 23,6 миллион һум тәшкил итә. Башҡортостанда һигеҙ һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән 47 ғаилә иҫәпләнә", - тип асыҡлыҡ индерҙе ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Юрий Мельников. 2015 йылдан бөгөнгә тиклем республикала тыуған һәм унан күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән 28 ғаилә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алды. Ошо маҡсатҡа бюджеттан 17,7 миллион һум бүленде.

✓ **"Башинформ" агентлығының конференц-холында Рәсәй матбуғаты көнөнә арналған тантаналы сара уҙҙы.** Йола буйынса, 13 ғинуарҙа билдәләнгән байрамға республиканың матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре, журналистар, нәшерселәр һәм полиграфистар йыйылды. Матбуғат хеҙмәткәрҙәренең кемдәрелер "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды, кемдәрелер Рәсәй Федерацияһы Үҙәк һайлау комиссияһының рәхмәт хаттарын, Рәсәй Журналистар союзының Почет грамотаһын алып ҡыуанды. Башҡортостан Республикаһы киң мәғлүмәт сараларында төрлө темаларҙы яҡтыртыуға арналған конкурстарға ла йомғаҡ яһалды. Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм туған телдәрҙе яҡтыртыу буйынса республика конкурсында 1-се урын яулау тураһындағы Диплом "Киске Өфө" гәзитенә, журналдарҙан - "Башҡортостан уҡытыусыһы"на, электрон киң мәғлүмәт сараларынан "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы ҡуҙәтеүсеһе Ләйлә Аралбаеваға бирелде.

✓ **Өфөлә реновация проектын Черниковка һәм Затон биҫтәләрендәге аҙ ҡатлы кварталдарҙа тормошҡа ашырыу ҡуҙаллана, тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығындағы матбуғат конференцияһында Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Артем Ковшов.** Чиновник асыҡлыҡ индереүенсә, инвесторҙарҙы иҫке торлаҡты төҙөкләндереү варианттары ҡыҙыҡһындырмай, аҙ ҡатлыларҙы һүтеү һәм яңыларын төҙөү проекты ҡарала. 2017 йылға мәғлүмәттәр буйынса, Өфөлә 1750-гә яҡын биш ҡатлы йорт урынлашҡан. Өҫтәүенә, ҡаланың торлаҡ хужалығы идаралығы балансында тағы ла ҡатмарлы техник тороштағы 1700 самаһы бер һәм ике ҡатлы йорт иҫәпләнә. Реновация иҫке аҙ ҡатлы торлаҡты биләмәләрҙең инвестиция үҫешен күҙ уңында тота. "Төбәгебеҙҙең торлаҡ төҙөү базары үҙенсәлеген иҫәпкә алып, совет осорондағы ос ҡаттан бейегерәк - биш йәки туғыҙ ҡатлы йорттарҙың торлаҡ фондын реновациялау маҡсатҡа ярашлы түгеллеген аңлайбыҙ", - тип белдерҙе Артем Ковшов. Властар Дәүләт Думаһының яҙғы сессияһында ҡабул итеү ҡуҙалланған һәм реновация буйынса уйын ҡағиҙәләрен күҙ уңында тотҡан яңы законды көтә. Билдәләнеүенсә, уҙған өс йылда Башҡортостанда 420 мең квадрат метр иҫке фонд һүтелгән һәм 500 мең квадрат метр яңы торлаҡ төҙөлгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИБАЙҘАҒЫ ХӘЛ

**Билдәле булыуынса, уҙған йылдың ноябренән Сибайҙа юғары әҙерлек режимы ғәмәлдә. Ташландыҡ баҡыр яҡкылығында мәғдән әселәнеү сәбәпле һауа зарарлы газдар менән бысранды. Әлеге ваҡытта ҡалала карьерҙа әселәнеү процестарын бөтөрөү эштәре бара. Атмосфера һауаһы сифаты даими тикшерелә.**

"Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Сибайға эш сәфәре барышында ошо хәлгә бәйле Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса комиссия ултырышын үткәрҙе, "Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты" акционерҙар йәмғиәтенең Сибай филиалы һәм ҡала етәкселеге ҡалала экологик именлекте тәьмин итеү буйынса тейешле саралар күрмәүҙәре өсөн ҡаты тәнҡитләнә. "Сибайҙа һауаның бысраныуы халыҡты нык борсоуын күрәбеҙ, - тине Радий Фәрит улы. - Был хәл мине нык хәүефләндерә. Халыҡ зарлана, проблема бар. Һеҙ күргән саралар етерлек түгел - хәлгә етдиерәк ҡарарға кәрәк".

"Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты" акционерҙар йәмғиәтенең Сибай филиалы директоры Йәүҙәт Биккинов әйтеүенсә, әле тотөн менән ҡапланған участка 2000 квадрат метр тәшкил итә, унан алда 6000 квадрат метр булған. "Беҙ бысҡып янған сығанаҡтың температураһын үлсәйбеҙ, дәрәсендә, әлегә уны онлайн режимда түгел, компьютер эшкәртеүе режимында ғына билдәләй алабыҙ, - тине Йәүҙәт Биккинов. - Йә карьер төбөндә, йә булмаһа өҫтә - ҡарау майҙансығында елләтеү ҡулайламаһын ҡуйыу мөмкинлеген өйрәнәбеҙ".

Сибайҙа йәшәүселәр Радий Хәбировҡа һауала зарарлы матдәләр тупланыуының артыуы тураһында һуңлап хәбәр итеүҙәренә зарланды. "Төтөн ҡаплаһа, өйҙән сыҡмайбыҙ һәм форточканы ябабыҙ", - тине улар. Радий Фәрит улы Сибай мэры Рөстәм Афзаловтың халыҡ араһында аңлатыу эштәрен бик сифатһыҙ алып барыуын билдәләне һәм кисекмәҫтән урындағы хакимиәт эшен штаб режимына күсерергә, иртәле-кисле бысратыусы матдәләрҙең концентрацияһы һәм күрелгән саралар тураһында доклад яһарға ҡушты һәм экологик мәсьәләнә хәл итеүгә ике аҙна ваҡыт бирҙе.

"Сибайҙа йәшәүселәргә, һис шикһеҙ, ярҙам кәрәк, - тип яҙҙы аҙаҡтан Радий Фәрит улы "Фейсбук"тағы сәхифәһендә. - Республиканың улар менән бергә икәнен, яныуҙы бөтөрөү өсөн көстөң һәм аҡсаның етерлек булыуын, ошо хәлдең килеп тыуыуына сәбәпсе "Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты" Сибай филиалын эҙемтәләрҙе сифатлы, яуаплы һәм сығымдар менән иҫәпләшмәйенсә бөтөрөүен мәжбүр итәсәгебеҙҙе аңлау мөһим. Шулай уҡ ҡалала медицинаны көсәйтелгән эш режимына күсереү кәрәк. Бөгөндән унда юғары квалификациялы медиктар бригадаһы эшләй, ә иртәгәнән тар йүнәлешле белгестәр - аллерголог, лор һәм башҡалар киләсәк..."

# ТОРЛАҠ ТӨҘӨЛӨШӨ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Республика Йортонда "Төҙөлөш сәғәте" форматында төҙөлөш буйынса кәңәшмә үткәрҙе.**

Республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Григорий Невоструев проблемалы объекттар төҙөү һәм өлөшсөләр менән эш итеү буйынса эш һөҙөмтәләре тураһында һөйләне, тип хәбәр итә Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте. Уның һүҙҙәренсә, 2018 йылдың аҙағында сафҡа индерелгән йорттарҙа кешеләргә фатирҙар тапшырыла. Уҙған йылдың августынан 500-ҙән ашыу граждан алданған өлөшсөләр өсөн "ҡыҙыл элемтә" эше барышында консультациялар алды. Ведомство вәкилдәре "Миловка паркы" һәм "Яңы Булгаков" торлаҡ комплекстарында проблемалы объекттарҙы һалыу барышын тикшерҙе, төҙөүселәр һәм өлөшсөләр ҡатнашлығында кәңәшмәләр үткәрҙе. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусының ҡушыуына ярашлы, проблемалы йорттар төҙөлөшөн тамамлау буйынса финанс-иҡтисади схемалар әҙерләнә. Инициатив төркөм вәкиле Зөлфиә Ғайсина хәбәр итеүенсә, әле профилле комитет, төҙөүсе ойошмалар һәм өлөшсөләр вәкилдәре араһында һөҙөмтәле үҙ-ара эш итеү механизмы яйға һалынған. Башҡортостан етәксеһе ошо эштә ҡатнашыусыларҙың конструктив диалогының мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Һеҙ өлөшсөләр менән аралашыу системаһын булдырғанһығыҙ, уның сиктәрендә көнүҙәк һорауҙарға яуап алырға мөмкин. Был осрашыуҙар даими булырға тейеш. Уның йомғаҡтары буйынса протоколдарҙы раҫларға, улар менән инициатив төркөм вәкилдәрен таныштырырға, ә артабан шулар буйынса өлөшсөләр алдында отчет менән сығыш яһарға кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

# ХАҠТЫ АРТТЫРМАҺЫНДАР

**Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров йәнә яңы коммуналь хеҙмәт - сүп-сар сығарған өсөн хаҡты кәметеүҙе талап итеүе хаҡында иҫкә төшөрҙө. Уның фекеренсә, ҡалала түләү - 70, ә элек сүп-сар йыйыу системаһы ойошторолмаған торлаҡ пункттарҙа 35 һумдан артмаҫҡа тейеш.**

"Был һандарҙы - 70-те һәм 35-те социаль-иҡтисади, халыҡтың социаль хәленән сығып атаным. Мине ишетегеҙ. Башҡа һандарҙы ҡабул итмәйем", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостанда ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары менән эш итеү буйынса яңы коммуналь хеҙмәт өсөн иҫәп 25 ғинуарҙан килә башлай. Ләкин әле үк идара итеүсе компанияларҙан яңы хеҙмәт өсөн хаҡ яҙылған түләү ҡағыҙҙарын алыу осраҡтары бар. "Кемдер аҡса алырға ашыға, күрәһең. Был законға ҡаршы. Ошондай икеләтә түләүҙәрҙе булдырмау маҡсатында быны махсус контролгә ҡуйыуҙы һорайым", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Бынан тыш, төбәк етәксеһе район хакимиәттәре башлыҡтарына 2019 йылдың аҙағына тиклем барлыҡ торлаҡ пункттарҙы контейнер майҙансыҡтары менән тәьмин итергә ҡушты. Уның һүҙҙәренсә, республика уларҙы әҙерләү сығымдарын ҡапларға әҙер. Әлеге ваҡытта 10 меңдән ашыу контейнер майҙансыҡтары, шулай уҡ 20 меңдән күберәк контейнер кәрәк. Радий Хәбиров Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Нияз Фазыловты республикала ҡалдыҡтар менән эш итеү өлкәһендә реформаны тормошҡа ашырыуҙы контролдә тотоу өсөн яуаплы итеп тәғәйенләне. 25 ғинуарҙан төбәктә ауыл биләмәләре башлыҡтары менән кәңәшмәләр үткәрелә башлай. Унда ағымдағы хәлдә һәм ошо йөнәлештәге мәсьәләләрҙе тикшереү ҡуҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә "Йәйәүле" операцияһы башланды. "2018 йылда Өфө юлдарында йәйәүлеләрҙе бәрҙереүҙең 666 осрағы теркәлгән, 40 кешенең ғүмере өҙөлгән, 661-е йәрәхәтләнгән. Дөйөм һандан йәйәүлеләр гәйебе менән генә 251 юл фажиғәһе булған, 32 кеше үлгән, 228-е яраланған. Йәйәүлеләр ҡатнашлығындағы аварияларҙың 60 проценты ҡараңғы ваҡытта теркәлә, шуға күрә яҡтылыҡты сағылдырыусы элементтарҙы ҡулланырға кәңәш итәбеҙ", - тип хәбәр иттеләр Өфө ЮХХДИ-да.

✓Өфөлә йәшәүселәрҙең иртәгәне көнгә ышаныу кимәле юғары. Ил Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты эксперттары рәсәйҙәрҙең фекере менән ҡыҙыҡһынғандан һуң шундай һығымта яһаған. Ул быйыл илдең 250 меңдән ашыу кеше йәшәгән 78 ҡалаһында уҙғарылған.Өфө менән бер рәттән, Ижевск, Яр Саллы, Ҡаҙан һәм Севастополь ҡалалары халҡы ла, иҡтисади ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, иртәгәһе көнгә ышана.

✓Domofond.ru күсемһеҙ милек порталы аналитиктары Рәсәй ҡалаларында яңы төҙөлгән йорттарҙағы фатирҙарға хаҡтар динамикаһын иҫәпләне. 2018 йылдың декабрендә квадрат метрҙың хаҡы буйынса - 210 мең һум- Мәскәү алдынғы урынды бирмәне. Өфө миллионлы ҡалалар рейтингында алтынсы баҫҡысты биләй. Яңы төҙөлгән йортта бер квадрат метрҙың хаҡы уртаса 65,4 мең һумға баһалана.

✓Өфөнөң коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы 31 ғинуарҙа ҡала парктарын, скверҙарын, газондарын тәртиптә тотоу һәм йәшелләндереү өсөн подрядсы һайлай. "Ростендер" майҙансығында урынлаштырылған документтарға ярашлы, 2019 йылда ҡаланы 2 миллион бер йыллыҡ үсенте биҙәйәсәк. Иң ҙур сәскә түтәлдәрен Салауат Юлаев скверында, Ленин майҙанында, Республика йорто, Рус драма театры янында, Октябрь һәм Салауат Юлаев проспекттарында яһау ҡуҙаллана.

✓Өфө хакимиәте "Махсус хеҙмәтләндереү комбинаты" өсөн яңы тарифтарҙы раҫланы. Баш ҡала мэрияһының эштәр идарасыһы Әлфирә Баҡыева ҡул ҡуйған документҡа ярашлы, ҡәбер ҡаҙыу хеҙмәте ҡиммәтләнгән. Йәйге осорҙа ерләү урынын билдәләү, таҙартыу, әҙерләү һәм тупраҡ һайлау (2,0х1,0х1,5 м) - 5 160 һумға, ә ҡыш көнө 5 760 һумға төшә, тиелә документта. 2018 йылда тарифтар 13 процентҡа арзанайраҡ ине.

**"БАШИНФОРМ" материалдары ҡулланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәне бер һөйләм менән әйтеп аңлатырға ҡушһалар, күптәр, моғайын, ошо мәҡәлде иҫенә төшөрөр ине. Ул, ысынлап та, ысын хужа хәстәрен асыҡ күрһәтә. Республика Башлығы оператив кәңәшмәлә тап ошо мәҡәлдән сығып эш иткәндер, моғайын. Ә инде ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин уны тейешле хеҙмәттәргә күрһәтмә биреүе менән нығытып ҡуйҙы. "Коммуналь хеҙмәттәргә бөгөндән үк ҡалалағы туҙан мәсьәләһен хәл итеү механизмын уйларға кәрәк. Радий Хәбиров көҙгөһөн ҡаланың бысраҡлығы тураһында бер нисә тапҡыр белдерҙе, ул ваҡытта ямғырҙар яуа ине. Ә ҡоро көндә беҙҙә туҙан күтәрелә. Шуға бөгөн үк был хаҡта уйларға һәм әҙерлек эштәре алып барырға кәрәк. Моғайын, ҡаланы йәшелләндереү ойошмаһына айырым бригада төҙөргә лә тура килер", - тине Өлфәт Мансур улы.**

# АРБАҢДЫ ҠЫШ ӘҘЕРЛӘ...

Артабан сығыш яһаусылар: Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге директоры урынбаҫары Андрей Шитов, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының полиция начальнигы - начальник урынбаҫары Илгиз Байсурин Яңы йыл, Раштыуа байрамдары ваҡытында йәмәғәт һәм граждандар хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса башҡарылған эш һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. Тап ошо һәм башҡа ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар инде йылдар дауамында баш ҡалала байрамдар, төрлө күләмле саралар ваҡытында ғына түгел, көндәлек тормошта ла ҡулға-ҡул тотоноп хәүефһеҙлек һағында тора. 2019 йылда, Өлфәт Мостафин белдереүенсә, баш ҡалала ике ҙур сара үтәсәк - Башҡортостан автономияһының 100 йыллығы һәм Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындары. Уларҙа ла хәүефһеҙлек тәьмин итеү бурысы тәүге урында тора.

2018 йыл Рәсәйҙә Ирекмәндәр йылы булды. Илдә был хәрәкәт барлығы 14 миллион кешене берләштерә. Баш ҡала хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитеты һәм Йәштәрҙең мәшғүллегенә булышлыҡ итеү үҙәге ҡарамағында ла ирекмәндәр хәрәкәте һәм йәштәрҙең инициативаларына ярҙам итеү бүлеге эшләй. Ул "Йәштәрҙе ирекмәнлек эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу" йүнәлешен үҫтерә. Был хаҡта хакимиәттең Йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе Роман Янгуров бәйән итте.

Йыл һайын Өфөлә меңдәрсә ирекмән ҡаланы төҙөкләндереүҙә, иҡтисади һәм социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнаша, экология мәсьәләләре менән шөғөлләнә, юғалған кешеләрҙе эҙләй, ололарға ярҙам итә, мәҙәни һәм спорт сараларын үткәреүҙә ҙур ярҙам күрһәтә һәм ошо эшмәкәрлеге менән граждандар йәмғиәтен үҫтерергә ярҙам итә. Уларҙың эшмәкәрлеген координациялау маҡсатынан "Башҡортостан Республикаһының Өфө ирекмәндәре ассоциацияһы" ойошторолған. Уның составына балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр клубтары, урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарының ирекмәндәр үҙәктәре, ижтимағи йәштәр ойошмалары ирекмәндәре, ҡаланың әүҙем граждандары - дөйөм алғанда 7 мең тирәһе кеше инә. Ирекмәнлек эшмәкәрлеге йәштәр араһында ғына түгел, 45 йәштән өлкәндәр араһында ла киң популярлыҡ яулай бара. Улар республика конкурстарында еңеү яулай, проекттары РФ Президенты грантына лайыҡ була.

Ирекмәндәргә социаль дәртләндереү саралары изгелек эшләү өсөн этәргес булып тормай, күптәр изгелекте хаҡ һорамай ғына ҡыла. Ләкин 2/3 өлөшө өҫтәмә дәртләндереү булыуы ла насар түгел тип иҫәпләй, сөнки бындай саралар - ул ирекмәндәрҙе тағы ла нығыраҡ эшләргә дәртләндереүсе стимул булып тора. Ирекмәндәр хәрәкәтенә ярҙам итеү маҡсатынан былтыр "Өфө волонтерына рәхмәт" хештегы менән акция ойошторола.

Дөйөмләштереп әйткәндә, йәмғиәттә үҫтереүҙә волонтерлыҡ эшмәкәрлеге өлөшөн баһаламау мөмкин түгел. Шуға ла былтыр 2025 йылға тиклем Ирекмәнлекте үҫтереү концепцияһы раҫланды. Уға ярашлы, төбәк һәм урындағы шарттарҙы иҫәпкә алып, ирекмәнлекте төрлө һөнәри һәм социаль төркөмдәрҙә, йәш категорияларында, ғаилә формаларында үҫтереү планлаштырыла. Әлбиттә, ирекмәнлек - күңел талабы буйынса башҡарылған эшмәкәрлек. Һәр хәлдә ирекмәндәр шулай уйлай. Әммә бөгөн ниндәй генә йүнәлештәге ирекмәнлекте алып ҡарама, ул ниндәй ҙә булһа власть структураһы тарафынан ҡурсалана, үҫтерелә, уҡыу йорттарының, башҡа учреждениеларҙың эшмәкәрлеген баһалағанда ла был пункт иҫәпкә алына. Ләкин, нисәмә йыл белем һәм мәғрифәтселек өлкәһендә волонтер булараҡ, ни өсөндөр мәғрифәтселек буйынса волонтерҙарҙың эшмәкәрлеге иғтибарҙан ситтә ҡала. Ә бөгөн был йәһәттән иң алдынғылар булып википедистар тора. Улар баш ҡалала ғына түгел, республиканың төрлө райондарында йәшәй, әммә уртаҡ дөйөм мөһим эш башҡара - ер йөҙөндә булған барлыҡ белемде ирекле ҡулланыуға сығарыу буйынса ҙур эш алып бара. Шулай уҡ ауылдарҙа бер кемдең бойороғо буйынса түгел, ә үҙаллы тупланып, заман афәте булған эскелеккә ҡаршы яу асҡан егеттәр ирекмән түгелме ни? Ә ағинәйҙәр? Эйе, ике төрлө стандарттар менән йәшәгән йәмғиәттә ирекмәндәргә лә ҡараш ике төрлө: власть структураларына уңайлы булған эштәрҙе башҡарыусылар - ирекмән, ә үҙаллы изге эштәрҙе атҡарыусыларға төрлө ярлыҡ тағырға мөмкин, фантазияғыҙ ғына етһен: алйоттар, милләтселәр, экстремистар һ.б. Ғәмәлдә милләте, уның киләсәге, теле, иле, дине өсөн ваҡыт менән иҫәпләшмәй эшләүселәр, ауыр ваҡытта бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙыусылар - улар ысын ирекмән. Артығын яҙып тороу ҙа кәрәкмәй.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ТУРА КИЛЕШЕҮ

**Былтыр "РФ Торлаҡ кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы 59-сы федераль закон көсөнә инеү сәбәпле, түләүҙәрҙең яңы схемаһына этаплап күсеү башланды. Уға ярашлы, ресурстар менән идара итеүсе ойошмалар ҡулланыусылар менән туранан- тура килешеүҙәр төҙөй. Түләүҙәрҙең яңы схемаһына күсеү, файҙаланған ресурстар өсөн артығын түләмәү өсөн ҡулланыусыларҙы эҫе һыу һәм йылылыҡ менән тәьмин итеүсе "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт вәкилдәре граждандарға аңлатма бирә.**

"БашРТС" йәмғиәте директорының тәьминәт буйынса урынбаҫары Ирина Попова һөйләүенсә, баш ҡалабыҙҙа яңы схемаға иң беренсе булып Орджоникидзе районы, Сипайлово биҫтәһе һәм үҙәк урамдарҙағы ҡайһы бер йорттар күсте. Уларға түләү квитанциялары "БашРТС"-тың үҙенән килә. Тиҙҙән башҡа райондар ҙа ошо ысулға күсереләсәк. Тура килешеүҙәргә күсеү мәсьәләһен күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр йә дөйөм йыйылышта хәл итә, йә ресурс ойошмалары идарасы ойошмалар менән үҙе килешеүҙе өҙә. Ресурстар ойошмаһына туранан-тура күскән тәүге айҙарҙа хаҡтарҙы иҫәпләүҙә һорауҙар килеп тыуыуы ихтимал. Уның сәбәбе - идарасы ойошмаларҙың эҫе һыу хисаплаусы приборҙарҙың туранан-тура түләүҙәргә күсеү алдынан күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙе ваҡытында хәбәр итеп еткермәүендә. Шуға күрә, "БашРТС" ҡарамағында был мәғлүмәттәр тулы килеш булмау сәбәпле, ҡулланыусыларға нормативтар буйынса түләү хаҡы иҫәпләнә. Норматив, ғәҙәттә, айлыҡ ҡулланыу дәүмәленә ҡарағанда артығыраҡ була, шунлыҡтан, ресурс ойошмалары офистарында сираттар хасил булды: кешеләр килеп тыуған хәлдең айышына төшөнөргә теләй. Ысынында иһә, клиенттарҙы хеҙмәтләндереүсе офистарға килеп йөрөүҙең кәрәге лә юҡ. "БашРТС"-тан килгән тәүге квитанцияны алғас та индивидуаль иҫәп приборындағы күрһәткесте ресурстар ойошмаһына хәбәр итеү ҙә етә. Ҡала халҡына уңайлылыҡ йәһәтенән "БашРТС" тарафынан прибор күрһәткестәрен хәбәр итеүҙең бер нисә ысулы булдырылды: банкта түләргә йәки ресурстар ойошмаһы сайтына инеп, "Шәхси кабинет"та теркәлеү аша, йә булмаһа мәғлүмәттәрҙе үҙегеҙҙең адрес, лицевой счет һандарын күрһәтеп, ошо электрон почтанан ебәрергә мөмкин: bashrts_tsp@bgkrb.ru , шул уҡ ваҡытта 8-800-511-30-15 һандарын йыйып, телефон аша ла хәбәр итә алаһығыҙ. Ошонан һуң ғына квитанцияларҙа дөрөҫ мәғлүмәттәр хасил буласаҡ һәм "БашРТС" йәмғиәте хеҙмәткәрҙәре тарафынан ай барышында ҡайтанан хисаплауҙар мөмкин буласаҡ. Әйтеп үтелеүенсә, эҫе һыу приборҙары күрһәткестәренең беҙгә 20 декабрҙән һуң ғына килеп етеүе сәбәпле, ҡала халҡында күп һорауҙар тыуҙы. Шул арҡала 2018 йылдың декабре өсөн түләү хаҡы ноябрҙә күрһәтелгән сумма күләменән артыҡ килеп сыҡты. Был хәлде еңел төҙәтергә була: әгәр һеҙ ноябрь өсөн түләп өлгөргән булһағыҙ, был сумманы алып ташлап, декабрь өсөн күрһәтелгән хаҡты ғына түләгеҙ. Граждандар иғтибарына шуны ла еткерәбеҙ: килеп тыуған хәл - ваҡытлыса ғына, ғинуар өсөн түләү документтарында актуаль мәғлүмәттәр сағылдырыласаҡ.

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# БӘЙЛӘНЕШТӘ БУЛЫҒЫҘ!

**Ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса төбәк операторының 1-се хеҙмәтләндереү зонаһына Өфө ҡалаһы, Архангел, Балаҡатай, Благовар, Благовещен, Дыуан, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Кушнаренко, Мәсетле, Нуриман, Салауат, Өфө, Шишмә райондары инә.** Ошо зона буйынса төбәк операторы, "Ҡаланы йыйыштырыу буйынса махсус автохужалыҡ" предприятиеһы яңы мобиль сервис индерҙе. Уға ҡалдыҡтарҙы сығарыу графигын боҙоу һәм рөхсәт ителмәгән сүплектәр тураһында хәбәр итергә мөмкин. Асыҡланған проблемалар хаҡында фото-видео мөрәжәғәттәрҙе WhatsApp һәм Viber мессенджерҙары аша 8-986-704-40-88 номерына ебәрергә була. Мәғлүмәт эшкәртелә һәм предприятиеның тейешле хеҙмәттәренә ебәрелә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Таштарҙан ҡотолоу

❖ Бөйөр һәм бауырҙа таш булһа, 2 өлөш кишер орлоҡтары, ҡырҙа үҫкән наратбаш үләне, 1 өлөш бәпкә үләне, уның орлоҡтарын да ҡушып, шул ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнап ултырған һыулы һауытта тотоп алырға, 20 минут төнәтергә. Һөҙөргә һәм 2 ай дауамында көнөнә 3 мәртәбә эҫе көйө яртышар стакан эсергә.

### Күҙҙәр талһа...

❖ 1 ҡалаҡ кипкән йәки сәскә атҡан саҡта өҙөп алынған муйын сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм күҙҙәрҙе шуның менән йыуырға.

### Селлә һыуығынан

❖ 1-әр ҡалаҡ шыршы еләге һәм энәләренә 2 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 4-5 мәртәбә 1/3 стакан эсергә.

❖ Ҡара бөрлөгән йәки ҡайын еләктәренә 1:10 күләмендә араҡы ҡойоп, ҡараңғы урында 10 көн төнәтергә. Һөҙөргә (еләктәрен һығып алырға), көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Кишер

❖ Һуған һәм һарымһаҡҡа ҡарағанда, ауыҙ ҡыуышлығындағы микробтарҙы кишер һөҙөмтәлерәк юҡҡа сығара. Шуға ла кишерҙе сей көйөнә йыш ашарға.

### Һыуыҡ ныҡ тейһә...

❖ Иҙелгән ҡоротҡа һары май, төйөлгән ҡара борос ҡушып эсһәң файҙалы, тир менән һыуыҡ сыға.

### Ирҙәр түлһеҙлеге

❖ 0,5 литр һыуыҡ һыуға 1 ҡалаҡ дегәнәк тамыры өҫтәп, 10 минут талғын утта тоторға, һыуығансы төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Бал, сельдерей, ҡабаҡ орлоғо, әстерхан сәтләүеге, һуғанды күберәк ашарға, груша компоты әҙерләп эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Урал аръяғында, XIX быуат уртаһына башлыса игенселек төбәге иҫәпләнһә лә, һарыҡтарҙы күпләп көткәндәр. Пермь губернаһы Шадрин өйәҙе ауылдарында 1 хужалыкта 9-10, ҡайһыларында 13-16 баш һарыҡ иҫәпләнә. Көньяҡтараҡ урынлашҡан Силәбе малсылыҡ төбәге һанала, унда 1 хужалыкта уртаса 13 һәм күберәк һарыҡ көтөлгән. Ҡурған өлкәһендә был һан тағы ла арта барған. Һарттар йәшәгән Оло Солтан ауылында XIX быуаттың 80-се йылдарында яҡынса 3 мең һарыҡ булыуы билдәле.**

XIX быуаттың 40-сы йылдарында Ырымбур губернаһы элекке Троицк өйәҙе территорияһында ҡайһы бер ауылдарҙа һарыҡтар йылҡылар һанына тиң булып, уҙып та киткеләгән. Верхнеуральск өйәҙе территорияһында бындай ауылдар өстөн бер өлөш алып торған. Заводтар төҙөлә башлағас, көтөүлектәр майҙаны кәмегән. Һөҙөмтәлә, йылҡы урынына һарыҡ тота башлағандар.

Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда һарыҡ күпләп көтөлөү сәбәпле, кейеҙ баҫыу киң таралған кәсеп һаналған. Мәҫкәү ауылы халҡының 500 баш һарыҡы булған һәм улар йәйләүҙә 50 кейеҙ тирмә ҡорған. Наурузда - 35 тирмә (450 баш һарыҡ), Көсөктә - 23 тирмә (240 баш һарыҡ), Юлдашта - 16 тирмә (400 баш һарыҡ). Көньяҡтараҡ урынлашҡан Әбйәлил һәм Баймаҡ районадарында ла шундай уҡ күренеш күҙәтелгән. Яңы Балапан ауылының 40 тирмәһе (400 баш һарыҡ), Булат ауылының 45 тирмәһе (556 баш һарыҡ), Баймырҙа ауылының 25 тирмәһе, Бәхтигәрәй ауылының 54 тирмәһе (326-шар баш һарыҡ), Төркмән ауылының 76 тирмәһе (780 баш һарыҡ) һ.б булған.

Ырымбур һәм Силәбе өйәҙҙәрендә 1864 йылда яҡынса 370 йәйләү һәм 11 мең тирмә иҫәпләнгән. Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙендә 6,5 мең тирмә иҫәпкә алынған. Был һандарға ҡарағанда, халыҡ кейеҙҙе күпләп баҫҡан.

Тауҙарҙан далаға сыҡҡан һайын мал һаны ла арткан. Ырымбур өйәҙендә Һамар йылғаһы буйындағы ауылдар малсылыҡ буйынса алдынғы һанала. Бигерәк тә Туҡ, Оло һәм Кесе Уран йылғалары үҙәндәре быныҡ өсөн бик ҡулайлы булған. Волга буйы далаларында ла мал тулып йөрөгән. Мәкензи менән Уоллэс исемле сит ил сәйәхәтселәре 1880 йылдарҙа Ҡаралыҡ йылғаһы буйында (Оло Ырғыҙ ҡушылдығы) 20 тирмәнән торған йәйләүҙә йәшәп китә. Шул уҡ ваҡыттарҙа уҡ ҡымыҙ менән дауаланыу өсөн Ҡаралыҡҡа Лев Толстой килә. Яҙыусы быға тиклем мәсет булараҡ ҡулланылған ҙур тирмәлә йәшәй. Ул "ике рәткә теҙелгән башҡа тирмәләр араһында тора". Ҡунаҡтарҙы ҡабул иткән мулланың 4 тирмәһе була.

XIX быуаттың һуңғы ун йыллыктарында һәм XX быуат башында мал һаны һәм тирмәләр кәмеһә лә, халыҡ һаман йәйләүгә сыға әле. Р. Янгужиндың материалдарына ҡарағанда, был мәлдә хәлле ғаиләләрҙә һарыҡ бер нисә көтөү була. Уртаса хәлләләрендә 10-20 баш һарыҡ иҫәпләнә. XX быуат башында сағыштырмаса иң күп тирмәләр Күбәләк-Теләү һәм Тамьян-Түңгәүер волостары йәйләүҙәрендә була. Улар 10-17-шәр тирмә ҡора.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ТУҒАН ТЕЛГӘ МӨНӘСӘБӘТ...

## ошо бәйгелә лә һынала

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала мәктәп уҡыусылары араһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үтеүе яңы йылдың тәүге һәм иң мөһим сараларының береһе булды. Унда быйыл Ҡурған, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән һәм Башҡортостандың төрлө төбәктәренән өс йөҙҙән ашыу 8-11 синыф уҡыусылары ҡатнашты.**

Төбәк-ара олимпиадала ҡатнашыусылар, ғәҙәттәгесә, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында осрашты. Улар өс өлөштән торған олимпиада һынауҙарын үтеп, еңеүсе һәм призерҙар исемлеген тулыландырҙы. БР Мәғариф министрлығы хеҙмәткәрҙәре ярышта үҙ көсөн һынарға теләгән башҡорт телен туған теле һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнгән балаларҙың һаны артыуына ҡыуанысын белдерҙе. Ысынлап та, был сарала балаларҙың үҙҙәре йәшәгән мөхитте башҡорт теле аша танып белеүен, тыуған ил һәм халыҡ киләсәгенә, әҙәбиәткә, мәҙәниәткә мөнәсәбәте асыҡ күренде. Ҡатнашыусыларҙың тап ошондай мөнәсәбәтен, һөйләш телмәренең камиллығын, фекер йөрөтөү ҡеүәһен һынау өсөн был юлы ойоштороусылар сараның өсөнсө этабына үҙгәрештәр индергән. Быға тиклем дә ярыш талаптары үҙгәртелә килгәйне, алдағы йылдарҙа бирелгән темаға шиғырҙар һөйләргә лә, яҙма эш башҡарырға ла тәҡдим ителгәне булды. Ә быйыл уҡыусыларға бөтөнләй яңыса эшләргә тәҡдим ителде. Мәҫәлән, ике конкурсантҡа баһалама комиссияһы ағзалары алдында билдәле бер темаға әңгәмә ҡороу бурысы йөкмәтелде.

- Беҙгә "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул", тигән мәҡәл төп фекер алышыу темаһы итеп бирелде. Төрлө районадарҙан килгән тиҫтерҙәрем менән икешәр-икешәр ултырып, ошо һүҙҙәрҙең мәғәнәһе тураһында әңгәмәләштек. Беҙ туған тел, ил, милләт, сәйәхәт итеү һәм сит илгә йәшәргә күсеү мәсьәләләрен күтәрҙек, - ти Баймаҡ районы Ҡолсора урта дөйөм белем биреү мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы Нәфисә Мостафина. Әйткәндәй, был ҡыҙ олимпиаданың төп еңеүсеһе тип табылды һәм уға бөтә еңеүселәр, призерҙар исеменән сығыш яһау форсаты тейҙе. Нәфисәнең туған телендә шартлатып һөйләшеүен ишеткән баһалама ағзаларының киләсәк быуынға ышанысы артып, йөрәктәренә йылы йүгергәндер, моғайын. Ә бына тиҫтерҙәре, һис шикһеҙ, унан өлгө алып ултырҙы.

Әйткәндәй, Баймаҡ районы, һәр ваҡыттағыса, өлгө күрһәтерлек һөҙөмтәләргә өлгәште: башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадаһына килгән ун ике уҡыусының дүртәүһе - еңеүсе, етәүһе призер грамотаһын алды. Шулай уҡ башҡорт милли мәктәптәре уҡыусылары араһында М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, Ейәнсура районы Абҙан ауылы урта мәктәбе, Ишембай районының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты, Баймаҡ районы Ҡолсора урта мәктәбе, Бөрйән районы Байназар урта мәктәбе уҡыусылары беренсе урынға сыҡты. Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған дөйөм белем биреү учреждениелары араһында Республика инженер лицей-интернаты, Мәләүез ҡалаһының 1-се гимназияһы, Ҡариҙел районы Ҡараяр ауылы урта мәктәбе, Баймаҡ ҡалаһының 4-се һанлы лицейы, Хәйбулла районының Татыр Үҙәк ауылы урта мәктәбе уҡыусылары юғары баһаланды. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр араһында Баймаҡ районы Түбә урта мәктәбе, Миәкә ауылының 2-се урта мәктәбе, Баҡалы ауылының 1-се урта мәктәбе маҡтап телгә алынды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Дәүләт органдарының да, йәмәғәт ойошмаларының да, мәктәптәрҙең һәм уҡыусыларҙың да, әлбиттә, ата-әсәләрҙең дә ынтылышы бер: үҙ туған телебеҙ аралашҡан, милли үҙаңын һаҡлаған һәм республикабыҙ, илебеҙ өсөн илһөйәр, телһөйәр шәхестәр тәрбиәләү", - тигәйне БР Мәғариф министрлығының Милли мәғариф, төбәк-ара хеҙмәттәшлек итеү һәм дәреслектәр нәшер итеү бүлеге етәксеһе Розалия Сафиуллина. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада ошо ҡуйылған маҡсаттарға ирешеүҙең бер күрһәткесе булыуын күп тапҡыр дәлилләне инде.**

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

**Һүрәттә: Гүзәлиә Төлкөбаева, Азалия Камалетдинова, Ғәлиә Шәйәхмәтова, Нәфисә Мостафина.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СИРАТТАҒЫ ЙЫЙЫН

**V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын Башҡортостан Республикаһы өсөн 2019 - юбилей йылында уҙғарырға кәрәк - Ҡоролтайҙың Башҡарма комитет рәйесе Данир Ғәйнуллин "Рәсәй Федерацияһы субъекттары ҡоролтайҙарының яңы йүнәлештәре һәм мөмкинлектәре" тигән түңәрәк ҡорҙа ошо хаҡта белдерҙе.**

Республиканан ситтәге ҡоролтайҙар эшмәкәрлеген яңыртыу мәсьәләләре тикшерелгән сарала Һамар, Свердловск, Ырымбур, Силәбе өлкәләре, Татарстан Республикаһы, Ханты-Манси һәм Ямал-Ненец автономиялы округтары, Екатеринбург, Һамар, Санкт-Петербург, Силәбе ҡалаларының башҡорт йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, республика Мәҙәниәт министрлығы һәм ведомство ҡарамағындағы учреждениелар вәкилдәре ҡатнашты. "Республиканың 100 йыллығы - бик мөһим дата, Рәсәй Президентының бер быуатлыҡ юбилейҙы байрам итеү тураһында тейешле указы бар. Шуға күрә, дөйөм съезды бер йыл алдараҡ, Башҡортостан өсөн тарихи әһәмиәтле йылда үткәреүҙе ҡаһунға ярашлы тип иҫәпләйем. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын ҡиҙәмле һәм тантаналы итеп ойоштороу мөһим. Өфөләге мәҙәниәт һарайынан тыш, республика районадарында ла халыҡ йыйындарын үткәрергә кәрәк", - тип билдәләне ҡоролтайҙың Башҡарма комитет етәксеһе. Төбәк лидерҙары был идеяны хупланы. Съезддың аныҡ датаһы ошо арала билдәләнәсәк.

Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы киң йәмәғәтселекте "Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы"н төҙөүҙә ҡатнашырға саҡыра. Буласаҡ V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ул төп документ проекты буласаҡ. "Халыҡ үҙенең киләсәген үҙе билдәләргә тейеш! - тип белдерелде Башҡарма комитетта үҙған эксперт советы ултырышында. - Стратегия өҫтөндә эшләүгә экспертарҙы ғына түгел, документтарҙы күмәкләп эшләргә мөмкинлек биргән заманса технологияларҙы файҙаланып, бөтөн халыҡты йәлеп итергә кәрәк". Был эштә республика халҡы ла, Башҡортостандан ситтә йәшәгән ватандаштарыбыҙ ҙа ҡатнаша ала. Документты әҙерләүселәргә стратегияның нигеҙен тәшкил итергә тейешле төп элементтарҙы, төп маҡсаттарҙы, шулай уҡ уны төҙөү механизмын билдәләү зарур. "20-30 йылдан башҡорттарҙың тормошо ҡайһы яҡҡа үҙгәрер? Демографик процесс ниндәй булыр, башҡорт телен белеүселәр һаны күпме булыр? Быуаттар үткәс тә башҡорт милләте булараҡ һаҡланып ҡалыу өсөн бөгөн нимә эшләргә кәрәк? Документта бөтә ошо һорауҙарға яуаптар булырға тейеш", - тип хәбәр иттеләр ойошманың матбуғат хеҙмәтендә. Документтың финал документы дәүләт программалары нигеҙен тәшкил итәсәк. Тәҡдимдәрҙе ҡоролтайҙың электрон адресына: kurultay-ufa@mail.ru, йәки 250-49-31 телефоны буйынса, ҡоролтайҙың социаль селтәрҙәге рәсми төркөмдәренә ебәрергә мөмкин.

✓ *Тимәк, Башҡорт ҡалаһы төшөрөлгән карталар тире менән сауҙа итеү өлкә-һендәге иң серле, иң дөрөҫ карталар булып иҫәпләнгән. Каталон картаһында ла шулай уҡ бары тик сауҙа юлына кәрәкле булған мөһим пункттар ғына билдәләнә.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# КАТАЛОН АТЛАСЫНДА...

## Мәскәү юҡ, ә Башҡорт ҡалаһы бар

**Баш ҡалабыҙҙа Нияз Мәжитов иҫтәлегенә бағышлап үткәрелгән Халыҡ-ара фәнни симпозиумға "Боронғо Өфө" республика тарихи ҡурсаулығы музейы саҡырыуы буйынса Санкт-Петербург ҡалаһынан тарихсы-картограф Александр Григорьевич Юрченко ла килгәйне. Александр Григорьевич тикшеренеүсе, сәйәхәтсе, урта быуаттар яҙыуҙарын уҡый белеүсе генә түгел, боронғо карталар белгесе лә. Беҙҙең сараға ул 1375 йылда төҙөлгән Каталон картаһын алып килгәйне. Картала "Башҡорт" тип билдәләнгән ҡала ла бар. Тарихсы ауыҙынан ишеткән мәғлүмәттәрҙе гәзит уҡыусыларыбыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.**





➔ **Башҡорт ҡалаһы тураһында ниндәй мәғлүмәттәр бар картала? Ғөмүмән, ҡала Өфө ҡалаһы аҫтында табылған Өфө-II ҡаласығына тап киләме?**

- Минә Н. А. Мәжитов менән В.А.Ивановтың дискуссияһы билдәле. Был бәхәс ҡыҫҡаса ошоға ҡайтып ҡалғайны: Өфө-II ҡаласығын Урта быуаттағы Башҡорт ҡалаһы итеп ҡарау нигеҙлеме? Ғалимдарҙың дәлилдәре археологик материалдарға ғына нигеҙләнә. Каталон картаһына улар ссылка ғына яһай. Йәғни, картаның төп нөсхәһе менән уларҙың икеһе лә таныш түгел. Тимәк, был тикшереүҙә атлас айырым һәм үҙаллы тарихи нигеҙ итеп алынмаған. Шунлыктан был тәңгәлдә картаның төп нөсхәһенә мөрәжәғәт итеп, Башҡорт ҡалаһына картографик һүрәтләмә биреү мотлаҡ.

Атласта Башҡорт ҡалаһы Булғарҙан төньяҡҡа - Себер ҡалаһына тиклем барған сауҙа сылбырында төшөрөлгән. Иҙел йылғаһы буйында биш ҡала бар. Уларҙың атамалары ошолай теркәлә: Jornan, Ciutat de Marmorea, Pascherti, Fachatim, Sebur. Һуңғы яҙыу эргәһенә "Себер тауҙарында бөйөк Едил/Иҙел йылғаһы тыуа" тигән аңлатма ла бирелә. Әммә был ҡалаларҙың береһенең дә ултырған урыны атап ҡына күрһәтелмәгән. Улар Иҙел йылғаһы буйында - шул ғына. Фәнни проблема бына ошонда ла: Алтын Урҙаның Каталон картаһында билдәләнгән ҡалалары бөгөнгө археологик ҡаҙылмаларға тап килеп етмәй. Шул уҡ ваҡытта тура килгәндәре лә бар. Ошо сәбәпле бәхәстәр ҡуба ла инде. Башҡорт ҡалаһы ла шундайҙарҙың береһе. Әммә бында ситуацияға киң ҡараш булдырғанда, йомаҡты сисергә була.

Картала Мәскәү ҡалаһы юҡ, йәки башҡа ул ваҡытта инде киң билдәлелек алған ҡалалар ҙа юҡ. Ә Башҡорт ҡалаһы бар. Бында һүҙ Түбәнге Волга һәм Урал араһындағы сауҙа бәйләнештәре хаҡында бара булырға тейеш. Был юл аша Яҡын Көнсығыш, Фарсы, Ҡытай илдәренә йөнлек тиреләре (мех) сығарылған. Ҡиммәтле тиреләр дипломатик бүләк урынына файҙаланылған. Йылы яҡ ханлыҡтары һәм һарай вәкилдәре ҡиммәтле тиреләрҙе бик юғары баһалаған һәм күпләп һатып алған. Сауҙагәрҙәр был тиреләрҙе алып килеү юлдарын әҙләгән. Был хәл, әлбиттә, ҙур конкурентлыҡ та тыуҙырған. Тире алып килеү юлдарын белеүселәр һирәк кенә булған һәм был мәғлүмәт сер итеп һаҡланған.

Башҡорт ҡалаһы Венеция оҫталары Франциска менән Доминик Пицигани портоландарында ғына бар (портолан - диңгеҙ капитандары өсөн яһалған карта). Башҡа баҫмаларҙа был ҡала төшөрөлмәгән. Тимәк, Башҡорт ҡалаһы төшөрөлгән карталар тире менән сауҙа итеү өлкәһендәге иң серле, иң дөрөҫ карталар булып иҫәпләнгән. Каталон картаһында ла шулай уҡ бары тик сауҙа юлына кәрәкле булған мөһим пункттар ғына билдәләнә. Илдәрҙең эсенә, төпкә инеп киткән һүрәтләнештәр юҡ. Һиндостанда ла, Алтын Урҙа ерҙәрендә лә, Уйғыр оазистарында ла, шулай уҡ Иҙел буйында ла бары тик эре һыу яткылыҡы юлындағы ҡалалар ғына билдәләнгән. Был - Болғарҙан Себергә алып барған сауҙа юлы.

Шулай итеп, Каталон картаһы - ул донъя менән идара итеү картаһы. Был атласты заказ биреп эшләтеүселәр иҡтисад өлкәһендә ҙур урын тотҡан кешеләр булырға тейеш. Әммә улар картаны оҫтанан ни сәбәп менәндер килеп алмаған. Быны шул йылдарҙа ҡырғын булып, халыҡты ҡырған чума эпидемияһы менән дә аңлатырға була. Атластың тулыһынса уҡылмаған һәм асылмаған булыуын да ошо сәбәп менән аңлатып булалыр. Чума арҡаһында тотош ҡалалар, өлкәләр ҡырылған. Ҡайһы бер билдәле ғаиләләрҙең, кенәздәрҙең һәм башҡаларҙың эшен генә түгел, фамилияһын да йөрөтөрлөк зат-ырыуы ҡалмаған. Атласҡа заказ эшләүселәрҙе лә шундай яҙмыш йотҡандыр, тигән һығымтаға килә тикшеренеүселәр. Ә инде карталағы Башҡорт тип исемләнгән ҡаланың әлеге Өфө-II ҡаласығы менән тап килеүен дәлилләйһе бар әле. Нияз Мәжитовтың тикшеренеүҙәрен дауам иттереүсе белемле башҡорт тарихсылары, археологтары, ғалимдары үҫеп киләләр һәм улар был эште яҡын киләсәктә ослап ҡуйырҙар, тигән өмөттәмен.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

1917 йылдың майындағы Бөтә Рәсәй мосолман съезында башҡорт делегацияһы территориаль үҙбилдәләнешкә ирешер өсөн, аграр мәсьәләне башҡорт хужалығының ихтыяжы һәм талабына ярашлы рәүештә хәл итер өсөн көрәшәсәктәре хаҡында асыҡтан-асыҡ белдергән. Шул уҡ ваҡытта улар үҙбилдәләнеште, Апрель конференцияһының резолюцияһындағыса, юғарынан ҡуҙәтеү аҫтында тотолмаған киң автономия менән генә сикләргә мәжбүр булған, сөнки иҫ киткес ҙур көстәр ҡаршы торғанда үҙаллы дәүләт булып айырылыу тураһында хыяллана ла алмаған. Татарҙар шул уҡ съезда Эске Рәсәй һәм Себер мосолмандарына милли-мәҙәни автономия алыу фекерен ярһып яҡлаған, ни өсөн тигәндә, уларҙың үҙ милли территорияһы һәм милли-территориаль мәнфәғәте булмаған, улар ғәмәлдә панисламизм байрағы аҫтында үҙҙәренең әүәлге хакимлығын тергеҙергә тырышҡан.

Бөтә Рәсәй мосолман съезындағы башҡорт делегацияһы (иллеләп кеше), автономия һәм ер хаҡында һөйләшер өсән айырым ҡоролтай йыйырға ҡарар итеп, әҙерлек комитеты төҙөгән. Комитетҡа ингән Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Сәғит Мерәсовтың ҙур тырышлығы менән 1917 йылдың 20 июлендә Ырымбурҙа I Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылған. Ҡоролтайға, Өфө, Ырымбур, Һамар, Пермь губерналарынан башҡорттоң төрлө социаль төркөм вәкилдәре килгән. Ҡоролтайҙа юғары милли власть органы итеп Башҡорт Мәркәз шураһы һайланған һәм урындарҙа милли власть органдары ойоштороға, айырым башҡорт ғәскәре төҙөргә ҡарар ителгән.

Бер ай үтеүгә, 1917 йылдың 25 августында, Өфөлә II Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылып, айырым башҡорт исемлектәре буйынса Бөтә Рәсәй ойоштороу йыйылышына һайлауға әҙерләнеү мәсьәләһе ҡаралған. Башҡорт Мәркәз шураһы әҙерлек эшен тиҙерәк бөтөрөп, Учредитель йыйылышы асылмаҫ элек Башҡортостан автономияһын иғлан итмәк һәм шуның менән автономияны танырға уны мәжбүр итмәк булған.

Ул арала, Учредитель йыйылыш асылғанға тиклем, Рәсәйҙә революцион хәл юғары көсәргәнеш алған. 1917 йылдың 25 октябрендә социалистик революция ҡубып, Ваҡытлы хөкүмәт төшөрөп ташланған. Властьы большевиктар баҫып алған.

1917 йылдың 2 ноябрендә яңы хөкүмәт, В. И. Ленин рәйеслегендәге Халыҡ Комиссарҙары Советы, "Рәсәй халыҡтарының хоҡуғы хаҡындағы декларация" ҡабул иткән. Декларация большевиктарҙың элек иғлан иткән "Рәсәй халыҡтарының айырылып, үҙаллы дәүләт төҙөр дәрәжәләге иректе үҙбилдәләнеш хоҡуғын" дөрөҫләгән.

Совет хөкүмәте биргән хоҡуҡҡа таянып, Башҡорт Мәркәз шураһы 1917 йылдың 15 ноябрендә Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналарындағы бөтә башҡорт территорияһын Рәсәй республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан иткән. Автономия иғлан иткән Башҡорт Мәркәз шураһы Рәсәйҙәге ҡара-ҡаршы торған политик һәм хәрби көстәрҙән конфликтына ҡатышмау яғында ныҡ торған. Был позиция шураның 1917 йыл 11 ноябрҙә сығарған беренсе фарманында асыҡ сағылған. Ул фарманда әйтелгән: "Башҡорт халҡына, - тиелгән, - сәйәси төркөмдәрҙең эшенә ҡыҫылып, көстә тарҡатыу һис тә ярамай, сөнки ҡыҫылыу башҡорт халҡының милли-ерле автономияһын ғәмәлгә аткарыуға тотҡарлыҡ яһар ине... Беҙ большевик та, меньшевик та түгел, беҙ - башҡорт. Беҙ кем яҡлы булырға тейеш? Бер кем яҡлы ла түгел. Беҙ үҙебеҙ яҡлы".

**(Дауамы бар).**

✓ *Быкиндың, Иҫәнсуриндың, Булашевтың ҡатындары ҡулға алына. Иҫәнсурин менән Булашевтың хәләл ефеттәре 8 йылға лагерҙарға оҙатылһа, Быкиндың ҡатыны Крушанскаяны, йөклө булыуына ҡарамаҫтан, Өфө төрмәһендә аталар.*





**"Ер күтәрмәҫ ауыр был вәхшәтте**
**Ил күтәрҙе, төшкәс башына.**
**Килер быуындарға ғибрәт итеп,**
**Яҙ һин уны тарих ташына", - тип оран һалды заманында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов үҙенең "Табыныу" поэмаһында репрессия темаһына мөрәжәғәт итеп һәм... эҙәрлекләүҙәргә, йәғни шулай уҡ репрессияға дусар ителде. Әммә ул йылдарҙа золомдоң алымдары ғына үҙгәргәйне. Һуңынан был темаға тарих фәндәре кандидаты, КПСС Өлкә Комитетының партия архивы мөдире Ғизетдин ИРҒӘЛИН мөрәжәғәт итте һәм ҡарайтылған исемдәрҙе ағартыуҙа ҙур эш башҡарҙы. Бөгөн уның менән тағы бер тапҡыр ил тарихында ошо ҡанһырап торған яраға ҡағылмаҡсыбыҙ.**

# ТАРИХ ҠАБАТЛАНМАҺЫН

**Оҙаҡ йылдар уҙған быуаттың 30-сы йылдары һуңында башланған репрессиялар тураһында хатта һүҙ ҡуҙғатыу ҙа тыйылды. Ә бына һеҙ республикала беренселәрҙән булып ошо теманы күтәреп сыҡтығыҙ, нахаҡҡа ғәйепләнгән шәхестәрҙең исемдәрен аҡлауға тотондоғоҙ. Был ваҡиғалар һеҙҙең ғаиләгә лә ҡағылдымы, әллә ҡыҙыҡһыныу, хәҡиҡәтте эҙләү этәргес булдымы?**

- Беҙҙең ғаиләгә золом еле ҡағылмаһы, әммә таныштарҙың яҙмышы аша был афәт хаҡында яҡшы беләм. Архивта эшләгәс, материалдар менән таныша торғас, шул асыҡланды: материалдар бик күп, ә киң мәғлүмәт сараларында был хаҡта ләм-мим һүҙ юҡ. Уйланып йөрөгәс, партияның Өлкә Комитетында 1-се секретарь булып эшләгән Яков Быкин тураһында материал йыя башланым. 1937 йылда үткәрелгән 3-сө пленумдың материалдары менән таныштым. 1988 йылда материал тупланды, әммә әгәр уны Өлкә Комитет хужалары менән килешеп, уларға күрһәтеп, яҙам тип әйтһәң, мәҡәләне баҫтырмаяҫаҡтар икәне билдәле ине. Шуға күрә, тура "Советская Башкирия" гәзите редакцияһына барҙым. Костенков тигән журналист минең яҙмаларҙы ҡарап сыҡты ла: "Берәүгә лә күрһәтеп тормайыҡ, әйҙә, был материалды баҫтырайыҡ", - тине. Мәҡәлә шәмбе көндө баҫылып сыҡҡан, мин ул турала белмәйем дә, иртән Өлкә Комитет секретары саҡырта. Ул: "КГБ рәйесе, Ирғәлин тигән тарихсы гәзиттә Быкин тураһында мәҡәлә баҫтырған, тип беренсе секретарь Хәбибуллинға килгән. Ул материалды баҫтырыу буйынса кем менән һөйләшкәйнегеҙ?" - тине. " Репрессия ҡорбандары тураһында пропаганда бүлеге мөдире Бакировҡа материал биргәйнек, башҡа кеше менән һөйләшмәнек", - тием. Секретарь ҡыҙып китеп: "Һинең был материалың өсөн мин яуап бирмәйем!" - тине. "Мин үҙем өсөн үҙем яуап бирәм. Унда дөрөҫ булмаған бер һөйләм дә юҡ!" - тип яуаплайым. Сығып киттем, ул ҡыҙып, ҡысҡырып тороп ҡалды.

Мәҡәлә донъя күргәндән һуң шундай шау-шыу китте, халыҡ уны ыңғай ҡабул итте. Шунан һуң, "Нинә Өлкә Комитеттың 2-се секретары булған Әхмәт Иҫәнсурин тураһында, Совнарком рәйесе Зиннәтулла Булашев, Афзал Таһиров, һәм башҡалар тураһында ла яҙмайһығыҙ?" тип мөрәжәғәт итә башланылар. Башҡаса саҡыртыуҙар ҙа булмағас, артабан Иҫәнсурин тураһында яҙҙым. Матбуғат баҫмаларында шаңдауҙар күренә башланы. Артабан инде Булашев, Башҡортостанда комсомолдың беренсе секретары булып эшләгән Шәрифә Тимерғәлина тураһында яҙып сыҡтым. Шулай китте лә китте. Ул ваҡытта мин Башҡортостан Республикаһының Сәйәси золом ҡорбандары ассоциацияһы рәйесе урынбаҫары инем. Был теманы күтәреп сыҡҡандан һуң репрессияланған шәхестәребеҙҙең балалары бер-береһен табышты һәм артабан да аралашып йәшәне.

**Тимәк, һеҙ күҙгә күренмәгән тимер ҡоршауҙы ысҡындырып, ниндәйҙер ситлекте асып ебәргәнһегеҙ...**

- Шулай килеп сыға инде. Әммә мәҡәләләр менән генә туҡтап ҡалманым, уларҙы йыйып, китап итеп сығарырға булдым. 1991 йылда беренсе китабым сыҡты. Унда һәр мәҡәлә һуңында архив материалдарына һылтанма бирҙек. 15 мең тираж менән сыҡҡан китап ике айҙа таралып бөттө. Шунан һуң 1997 йылда "Трудный путь к правде" тигән икенсе китап әҙерләнек. Халыҡ золом ҡорбандарының иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатынан һәйкәл эшләтеү тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы. Матбуғат йорто менән хәҙерге Аграр университет араһындағы парк элек Иванов зыяраты булған. Репрессия ҡорбандарын, атылғандарҙы йөк машинаһы менән килтереп, шундағы соҡорға ташлағандар. Шунда стела ҡуйҙырҙыҡ. Артабан инде исемлек булдырыу ихтыяжы килеп тыуҙы. Республиканың сәйәси репрессиялар ҡорбандарының алты томлыҡ исемлеген баҫтырып сығарҙыҡ.

**Ошо исемлеккә барлығы күпме кеше ингән? Улар бит республиканың алдынғы ҡарашлы кешеләре булған. Бөгөнгө күҙлектән баһалағанда, репрессияларҙың төп сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

- Башҡортостанда 52 мең самаһы кеше сәйәси золом ҡорбаны булған. Әлбиттә, улар революция яһаған, ауыл хужалығын, сәнәғәтте күтәргән һәм бер ғәйепһеҙгә хөкөм ителгән кешеләр. Был ғилле 1934 йылда, Ленинградта Үҙәк Комитеттың беренсе секретары Сергей Кировты үлтергәндән һуң башлана. Ул бик талантлы шәхес була. Хатта уны Сталин урынына ҡуйыу тураһында һүҙҙәр ишетелеп ҡала. Был, әлбиттә, Сталинға оҡшамай. Шулай уҡ ул үҙенә ҡаршы сыҡҡан, уның сәйәсәте менән килешмәгән Бухарин, Зиновьев, Каменев кеүек шәхестәрҙе 1936-1937 йылдарҙа юлынан алып ташлай. Йәнәһе лә, Сталинға ҡаршы заговор ойошторғандар, тип, махсус рәүештә немецтарҙан мәғлүмәт алалар, һәм барлыҡ хәрби етәкселәрҙе ҡыра башлайҙар. Ул ваҡытта Эске эштәр халыҡ комиссары булып эшләй башлаған Ежов, ҡулындағы власты файҙаланып, репрессия эшмәкәрлеген киң йәйелдерә. Ниндәйҙер республикала йәки өлкәлә халыҡты ҡырыу эштәрен башлар алдынан уға юлбашсының яҡын арҡаҙашы ебәрелә.

1937 йылдың авгусында Башҡортостанға партияның контроль комиссияһы инструкторы Сәхийәнова килә. Бер аҙҙан ул Ежов менән Сталинға: "Башҡирияла (ул ваҡытта Башҡортостан тип аталмай) халыҡ дошмандарына ҡаршы көрәш алып барылмай. НКВД мөһим постарҙа ояլап алған халыҡ дошмандарының - буржуаз милләтселәрҙе, троцкистарҙы, фашистик диверсанттарҙы, шпиондарҙы һәм кеше үлтереүселәрҙе Өлкә Комитет ҡатнашлығынан тыш фашлай, ә бында сигналдарҙы баҫырып ултыралар, дошмандарҙы яҡлап киләләр", - тип хат яҙа. Икенсе хатын Сәхийәнова ойоштороу бүлеге мөдире Маленковҡа тәғәйенләй һәм Башҡортостанда пленум үткәрергә, кисекмәҫтән Быков, Иҫәнсурин һ.б. эшен тикшерергә кәрәклеген белдерә. 3 октябрҙә республикаға ВКП(б) Үҙәк Комитеты секретары А. Жданов килә һәм 4-6 октябрҙә Башҡортостан Өлкә комитетында пленум үткәрелә. Уның эшендә 63 ағзаның ни бары 30-ы самаһы ғына ҡатнаша. Жданов бик ҡаты сығыш яһай, Быкин - троцкист, Иҫәнсурин - милләтсе, тип, уларға бысраҡ ташлай. Пленум ике йөҙлә, һатлыҡ йән тип баһалап, Быкин менән Иҫәнсуринды ВКП(б) Өлкә Комитеты һәм бюроһы составынан, шулай уҡ партия сафынан сығара, уларҙың эшен НКВД-ға тапшырыу тураһында ҡарар итә. Ошо пленумда бик күп етәкселәр, пленум ағзалары, йөмғеһе 41 кеше, "халыҡ дошманы" мөһөрө баҫылып, партиянан сығарыла. Быкиндың, Иҫәнсуриндың, Булашевтың ҡатындары ҡулға алына. Иҫәнсурин менән Булашевтың хәләл ефеттәре 8 йылға лагерҙарға оҙатылһа, Быкиндың ҡатыны Крушанскаяны, йөклө булыуына ҡарамаҫтан, Өфө төрмәһендә аталар.

Биш кешенән торған яңы бюроға Залыкин, Медведев, Семенов, Нурғәлиев һайлана. Шунан Башҡортостанда репрессия киң ҡолас ала. Бер йыл эсендә барлыҡ етәкселекте тиерлек алыштыралар. Бигерәк тә ер, мәғариф, юстиция, финанс халыҡ комиссариаттары, прокуратура һ.б. учреждениелар ныҡ зыян күрә, уларҙың етәкселеге, белгестәре ҡулға алына. Халыҡ араһында бер-береһенә ялыу яҙыу күренеше киң тарала. Ул ваҡытта суд тигән нәмә юҡ, барыһының яҙмышын НКВД, райком секретары, прокурор ингән "тройка" хәл итә. Төрмәләрҙә, лагерҙарҙа һәләк булыусылар ғына түгел, ә ошо хәүефле заманда йәшәүселәр барыһы ла был террорҙың ҡорбаны була, сөнки уларҙы халыҡ алдында ата-әсәләренән, ирҙәренән, ҡатындарынан, ағай-апайҙарынан, дуҫ-иштәренән баш тартырға мәжбүр итәләр.

**тарих итеп**

> ***Башҡортостанда 52 мең самаһы кеше сәйәси золом ҡорбаны булған. Әлбиттә, улар революция яһаған, ауыл хужалығын, сәнәғәтте күтәргән һәм бер ғәйепһеҙгә хөкөм ителгән кешеләр. Был ғилле 1934 йылда, Ленинградта Үҙәк Комитеттың беренсе секретары Сергей Кировты үлтергәндән һуң башлана. Ул бик талантлы шәхес була. Хатта уны Сталин урынына ҡуйыу тураһында һүҙҙәр ишетелеп ҡала. Был, әлбиттә, Сталинға оҡшамай.***

**Ул замандарҙа ялыу йәки кемдеңдер өҫтөнән шикәйәт яҙыу, моғайын да, һәр кем үҙенең ғүмерен һаҡлап ҡалырға тырышыу һөҙөмтәһендә артҡандыр...**

- Беренсенән, һәр кем үҙ ғүмерен һаҡлап ҡалырға тырышһа, икенсенән, ололар артынан йәштәр килә. Ололар власты алған, йәштәргә лә власть кәрәк, ололар йәштәргә юл бирмәй, шуға йәштәр уларҙы күрә алмай башлай. Амбициоз кешеләр күп була. Партия йыйылыштары булһа, уларҙа һәр кем нисә халыҡ дошманын фаш итеүе тураһында отчет бирә. Әммә уларҙың ялаһын раҫлаусы: халыҡ дошманымы ул, шымсымы, илгә ниндәй зыян килтергән - бер генә дәлил дә булмай. Кемдеңдер һүҙе буйынса ғына ҡулға алыуҙар киң тарала.

**Тимәк, бында власҡа яраҡлашыу, ярамһаҡланыу принцибы алдан йөрөгән һәм хөкөм һөргән?**

- Эйе, һәм бының өсөн нимә генә уйлап сығармағандар. Мәҫәлән, яңы түрәләр Мәскәүгә хат яҙып ебәрә: Башҡортостанда Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил, Хәйбулла, Йылайыр райондарында өс меңдән артығыраҡ кеше 62 отрядҡа берләшкән, улар совет власына ҡаршы көрәшә, 700-гә яҡын ҡоралы, әллә нисәмә пулеметы, револьверы бар, тип. Һуңынан тикшереү буйынса ул факттарҙың береһе лә раҫланмай. Ә НКВД-ла эшләгән кешеләр, үҙҙәренең эшен күрһәтеү өсөн, дошмандарҙы фаш иттек, тип тағы яҙа.

***✓ Яҙыусылар араһында ла бик яман кешеләр була. Башҡорт яҙыусылары Дауыт Юлтый, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, Ғабдулла Амантай, Афзал Таһиров, Имай Насыри - уларҙың барыһын да үҙ араларында йөрөгән кешеләр һата.***

# ӨСӨН...

## яҙҙым үткәндә...

Йәки Йылайыр районында Беляев тигән кеше 300-ҙән артығыраҡ кешене ҡулға ала, шуларҙың 100-ҙән артығырағын "тройка" атып үлтерә. Дәүләкән районына 100 "халыҡ дошманы"н табырға план биреп, ике кешене ебәрәләр. Тегеләр 97 кешене ҡулға ала, 3 кешене бер нисек тә таба алмай. Шунан Өфөгә шылтыраталар: "Фашларлыҡ башҡа кеше юҡ", - тип. Яуап ниндәй була инде: "Планды үтәгеҙ, үтәгәс ҡайтырһығыҙ. Бик булмаһа, япон йәки немец шпионы тип яҙығыҙ", - тиҙәр.

Ҡулға алыныусыларҙан тәүҙә итәғәтле генә һорау алалар, һуңынан бер кешегә ике-өс следователь беркетелә. Улар кешегә ике-өс тәүлек буйы йоҡо ла бирмәй, һыу ҙа эсермәй, һорау ала. Кешенең тамам хәле бөткәс, ул нимә яҙһағыҙ ҙа яҙығыҙ, тип, битарафҡа әйләнә, ҡайһы берәүҙәре, судта дөрөҫөн һөйләрмен, тип өмөтләнә. Бәғзеләр, судта ғәҙеллек булырына ышанып, үҙен халыҡ дошманымын тип танырға мәжбүр була. Һуңынан асыҡ суд булмай, "тройка" хәл итеп, барыһын да аталар.

Яҙыусылар, артистар араһында, партия эшмәкәрҙәре араһында ла бик яман кешеләр була. Башҡорт яҙыусылары Дауыт Юлтый, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, Ғабдулла Амантай, Афзал Таһиров, Имай Насыри - уларҙың барыһын да үҙ араларында йөрөгән кешеләр һата.

Артистар араһында ла 3 көн йыйылыш бара. Беренсе милли театр ойоштороусы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы Мортазин-Иманскийҙы, художество етәксеһе Мәкәрим Мәһәҙиевты юҡҡа сығарыу өсөн нимә генә уйлап тапмайҙар - йәштәргә юл бирмәнеләр, йәштәрҙе күтәрмәнеләр һ.б. Беренсе композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовты ла репрессия тулҡыны йота. Башҡортостанда ғына түгел, башҡа өлкәләрҙә йәшәгән кешеләрҙе ҡулға ала башлайҙар: улар араһында Ҡушаев, Мортазин, Халиҡов, Мөхәмәтҡолов, Тимерғәлина ла була. Әхмәтзәки Вәлиди заманында Башҡортостан менән Рәсәй хөкүмәте араһында килешеү төҙөгәндә әүҙем ҡатнашҡан кешеләрҙең һуңынан барыһын да ҡырып бөтөрәләр. Бер генә кеше - Абдулла Әҙеһәмов тороп ҡала. Ул хоҡуҡ һаҡлау системаһынан була, Беламор каналын төҙөүҙә эшләп йөрөгәндә яҡшы эшләүселәрҙе ике йылдан һуң азат итәләр, шунда берәү, "Башҡортостанға ҡайтма, унда һине ҡулға аласаҡтар, икенсе ерҙе һайла", ти. Ул шунда тороп ҡала.

**▸ Элекке ваҡыттар менән сағыштырғанда, хәҙер ҙә бер-береһен ошаҡлаусылар, яла яғыусылар, бер-береһенән шикләнеүселәр күп. Ул шул репрессия йылдарында һалынған ҡурҡыу тойғоһо булып, һаман халыҡ хәтерендә һаҡланамы? Хәҙер демократия, асыҡлыҡ шарттарында йәшәйбеҙ, фекереңде ҡурҡмай әйтергә, үҙеңде яҡларға, кемделер тәнҡитләргә мөмкин, тибеҙ... Ғәмәлдә бит һаман да эҙәрлекләүҙәр дауам итә...**

- Ғәмәлдә, ысынлап та шулай. Хужа тураһында бер-ике һүҙ әйттениһә - иртәгәһенә икенсе эш урыны эҙләй инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ысын демократия юҡ. Ул бары тик һүҙҙә генә. Уҙған быуаттың 50-се йылдарындағы документтарҙы ҡараһаң, ул ваҡытта райком, горкомдарҙа үткән йыйылыштарҙа тәнҡит бик көслө була. Етешһеҙлектәрҙе төртөп күрһәтеп сығыш яһайҙар. Һуңынан яйлап ҡыҫа башлайҙар, кем саҡ ҡына ҡаршы һүҙ әйтә, уны эштән алалар йәки эҙәрлекләүҙәргә дусар итәләр. Репрессияның алымдары үҙгәргән тип әйтеп булмай, әммә шуға яҡын.

**▸ Ялған хәбәр таратып, Бөйөк Ватан һуғышы алдынан беҙҙең билдәле хәрби начальниктарҙы аталар. Был махсус рәүештә эшләнгән ҡотҡо булыуы ла мөмкин. Әммә етәкселектең хаҡ менән ялғанды айырырға аңы етергә тейеш ине бит, шуның өсөн дә ул лидер, юлбашсы лабаһа...**

- 1934-1940 йылдарҙа Оборона халыҡ комиссары булып Ворошилов эшләй. 1940 йылғы Фин һуғышында совет армияһының күп етешһеҙлектәре асыҡлана. Һөҙөмтәлә Ворошилов эшенән бушатылып, Оборона халыҡ комиссары итеп СССР маршалы Тимошенконы ҡуялар. Ул йылдарҙа маршалдар Тухачевский, Блюхерҙы, 7 армия һәм корпус командирҙарын, РККА-ның 65 процент юғары команда составын аталар. Дөрөҫөрәге, армияны командирҙарһыҙ ҡалдыралар. Ворошилов, нарком булараҡ, уларҙы яҡлау, улар халыҡ дошманымы, юҡмы икәнен асыҡлау буйынса бер нәмә лә эшләмәй. Сөнки дворян сығышлы, юғары мәҙәниәтле Тухачевский күп мәсьәләләр буйынса уның фекере менән килешмәй, уны тәнҡитләй.

Етәкселәр, әлбиттә, хәбәрҙәрҙең ялған икәнен белә, шулай уҡ үҙҙәренән юғары булғандарҙы бөтөрөргә кәрәклекте лә аңлай, һөҙөмтәлә Сталин нимә әйтә - шул дөрөҫ була. Башҡортостанды ғына алып ҡарағанда ла, тимер юлда берәй авария булһа - "халыҡ дошмандары" ғәйепле, колхоз баҫыуҙарында иген шытмай ятһа - агроном ғәйепле, мәктәптә всеобуч үтә алмай икән - директор менән роно мөдире ғәйепле. Уңыштар инде - барыһы ла хужаларҙың ҡаҙанышы. Быкин, Иҫәнсурин, Булашевтарҙы хөкөм итәләр, ғәмәлдә, 1935 йылда Быкинға, Булашевҡа, республикаға Ленин ордены бирелә. Бер йыл эсендә, 1935 йылда, Өфө-Ишембай тимер юлы, нефть үткәргес һалына, моторҙар эшләү заводы сафҡа инә, 1930 йылдарҙа эшһеҙҙәр өсөн Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре, 8 Март исемендәге ҡатын-ҡыҙҙар кейеме тегеү фабрикалары, дауаханалар төҙөлә. Республика бөтә яҡлап күтәрелә. Бер йыл эсендә 5 яңы юғары уҡыу йорто, мәктәптәр асыла. Башҡортса дәреслектәр нәшер ителә башлай. Иҫ китмәле күп нәмә эшләнә. Әммә уларҙың береһен дә иҫкә алмайҙар.

**▸ Шағир юҡҡа ғына:**

**Бер ҡараһаң, утыҙ етелә**
**Ҡотоптарға осоп етелә;**
**Бер ҡараһаң, утыҙ етелә**
**Ҡоштар осоп етмәҫ ерҙәргә,**
**Баштар ҡайтып етмәҫ гүрҙәргә**
**Аҫыл ирҙәр алып кителә...**
**Шулай ине, тиҙәр, заманы...**
**Ә ҡайҙа һуң кеше иманы?**
**Ә бит күптәр, һатып иманын,**
**Ҡалҡан итте шул саҡ заманын,**

**- тип яҙмаған. Уйлап ҡараһаң, Сталин бит үҙе ауыл буйлап халыҡ дошмандарын эҙләп йөрөмәгән, уларҙы шунда йәшәгән халыҡ үҙе һатҡан. Ошо процесты нисектер туҡтатып булмай инеме икән ни?**

- Был тәү сиратта Сталинға кәрәк була. 1934 йылдағы съезд ваҡытында күптәр Сталинды түгел, Кировты һайлау тураһында һүҙ алып бара. Был, әлбиттә, юлбашсыға оҡшамай, кем икенсе төрлө фекерләй, шуларҙы юҡ итеү башлана. Был - сәләмәт булмаған амбиция эҙемтәһе. Быкин да бик ҡаты сығыш яһай: "Башкирияла рус шовинизмын, татар милләтселәрен бөтөрҙөк, яңы дәреслектәр яҙҙырҙыҡ, күп эштәр башҡарҙыҡ", - ти. Ул ваҡытта, рус шовинизмын бөтөрҙөк, тиеү - көслө сығыш була. Шулай тип әйтергә уның батырсылығы етә бит...

**▸ Тухачевскийҙың дворян сығышлы, юғары мәҙәниәтле кеше булыуын әйтеп киттегеҙ. Шундай кире күренештәрҙе булдырмау өсөн, бәлки, йәмғиәткә кешелеклелек, мәҙәнилек етмәгәндер?**

- Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында эшсе-крәҫтиәндәрҙән кадрҙар әҙерләү буйынса академия ойоштороla. Башҡортостанда Өлкә Комитет секретары булып эшләгән Ваһаповтың 4 класс ҡына белеме була. Уны Екатеринбургка Химия-технология академияһына уҡырға барырға тәҡдим итә Өлкә Комитет. Мәскәү раҫларға тейеш була. Ул Мәскәүгә бара, ойоштороу бүлегендә Ежов эшләгән була. Ул уны: "4 класс белемең менән академияға уҡырға инергә теләйһеңме?" - тип кире бороп сығарып ебәрә. "Сталиндың килгәнен көтөп йөрөйөм. Ил башлығы лифтҡа барып еткәс, бергә инергә тип уҡталғайным, арттан тотоп алдылар, - тип һөйләгәйне Ваһапов үҙе: Минең ЦИК-тың значогы бар. Сталин значокты күргәс, ин, тине, ҡайҙан килгәнемде һораша башланы. Башҡортостандан, тинем. "Бына мине химия-технология академияһына тәҡдим иттеләр, иптәш Ежов ҡабул итмәй", тием. Ҡабул итеү бүлмәһендә Бәләбәй районынан булған Поскребышев тигән кеше ултыра. Сталин уға: "Позвони Ежову, пусть принимает Вагапова в академию", - тине. Ежовҡа ҡабат барғас, ул: "Молодец, һүҙеңде һүҙ итәһең", тип, академияға ҡабул итте". Йәғни, ул ваҡытта академияны 2-4 класс белемле кешеләр тамамлай ине. Әлбиттә, уларҙың мәҙәни кимәле бик булмай, әммә әүҙемлектәре була. Хрущев үҙенең тауышы менән алдыра. Идара итеү мәҙәниәте түбән кешеләр етәкселек итеүгә ҡарамаҫтан, халыҡта энтузиазмдың көслө булыуы ҡотҡара. Стаханов хәрәкәте шулай тыуа.

**▸ Бөйөк Ватан һуғышына тиклем күпме халыҡты ҡырғандар, уның элитаһын юҡ иткәндәр, халыҡтың рухын ҡаҡшатҡандар, күңеленә ҡурҡыу хисе һалғандар. Әммә һуғыш ваҡытында башҡорттарҙан бер генә һатлыҡ йән дә булмаған, тиҙәр... Логика буйынса, киреһенсә, шундай репрессияларҙы үтеп, улар бер-береһен һатырға, ошаҡларға тейеш һымаҡ... Был нимә тураһында һөйләй: халыҡтың асылы, булмышы ҡанда йәшәй, рух ныҡлығы тап киҫкен мәлдәрҙә сағылыш табамы?**

- Халыҡ хаҡ менән нахаҡты айыра бит ул. Бына, мәҫәлән, башҡорт халҡының бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлидиҙе һатлыҡлыҡта ғәйепләп, күпме һүҙ тараттылар. Йәнәһе, һуғыш ваҡытында Германияға барған, сит ил, пропаганда министрлыҡтарының юғары дәрәжәле вәкилдәре, һатлыҡ йән Власов менән осрашҡан. Республиканың Дәүләт Именлеге комитетында эшләгән ике полковник үҙҙәре яҙған китапҡа ла шундай һүҙҙәрҙе яҙҙы. Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыу уңайынан миңә архивта булған документтар буйынса сығыш яһарға ҡуштылар. Дәүләт именлеге комитетына: "Хеҙмәткәрҙәрегеҙ Әхмәтзәки Вәлиди тураһында яҙҙы, был фактты документтар менән раҫлауығыҙҙы һорайым", - тип хат ебәрҙем. Авторҙарҙың өйөнә барғандар, архивты тикшергәндәр. Полковниктарҙың береһе атылып үлде. Миңә: "Ундай документ юҡ, телдән һөйләнелгән мәғлүмәт яраймы?" тип һоранылар. "Юҡ, беҙ һәр саҡ ҡағыҙҙа теркәлгән мәғлүмәткә таянабыҙ. Документ юҡ икән, кире ҡағыу бирегеҙ", - тинем. Шунан миңә: "Мәғлүмәтте раҫлаусы документтар юҡ", тигән ҡағыҙ яҙып бирҙеләр. Шулай уҡ Әхмәтзәки Вәлидиҙе Урта Азияла баҫмасыларҙың баш күтәреүсе отрядтарында ҡатнашҡан тип яҙҙылар. Үзбәкстан КГБ-һына хат яҙҙым. Уларҙан Зәки Вәлидиҙең ысынлап та баҫмасылар хәрәкәтендә идеолог булараҡ әүҙем ҡатнашыуын, Хорезм, Бохара республикаларының автономиялы булыуын теләүен һәм шул йүнәлештә идеология алып барыуын, ә ҡулына ҡорал тотоп, һуғышып йөрөмәгәнлеген раҫлаған хат килде. Артабан СССР КГБ-һына, "Башҡортостан Дәүләт Именлеге комитеты хеҙмәткәрҙәре китап сығарҙы, шундағы фактарҙы, бигерәк тә Әхмәтзәки Вәлидиҙең Власов менән осрашыуын документаль нигеҙҙә раҫлауығыҙҙы һорайым", тип хат яҙҙым. Уларҙан "Вәлиди - милләтсе, милли хәрәкәт етәксеһе", тигән генә яуап килде, әммә китапта яҙылған фактарҙы раҫламанылар. Ҡайһы бер ваҡытта Әхмәтзәки Вәлидиҙең Германияға бәғзе әсирҙәрҙе ҡотҡарыу өсөн барыуы тураһында ла имеш-мимештәр ишетелеп ҡала. Сығыш яһағанда ошо дәлилдәрҙең барыһына ла туҡталдым, һәм ошонан һуң Вәлидиҙе аҡлап һөйләй башланылар.

**▸ Халыҡ йәки айырым кеше менән идара итеү өсөн унда ҡурҡыу хисе йәки ғәйеп тойғоһо тыуҙырырға кәрәк, тиҙәр. Электән килгән психологик алым бөгөн дә дауам итә түгелме? Бәлки, шуға ла башҡа милләттәр эргәһендә башҡорттар баҫалҡы һәм баҫылған кеүек күренәләр?..**

- Был бөтөнләй хата, етәксенең иң уңышһыҙ алымы. Кеше нимәнелер ҡурҡышынан эшләргә тейеш түгел. Ул ваҡытлыса ҡурҡырға мөмкин, әммә һәр ваҡыт түгел. Эйе, башҡорттар ирек өсөн 80-ләгән ихтилалға күтәрелә. Улар менән етәкселек иткән кешеләр аҡыллы кешеләр була. Ихтилалдар баҫтырылғас, уларҙың һәр береһен язаға дусар итәләр. Һәр ихтилалдан һуң күпме кешене ҡыралар, 700-ҙән ашыу ауыл яндырыла. 150 старшинаны Ырымбурға саҡырып алып, терелә ҡомға күмеп үлтерәләр. Автономия яулағанда күпме милләттәшебеҙ ҡырыла. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында танкыларға ҡаршы һыбай сабалар. Бер рус кешеһенең ихтилалдарҙан һуң яҙған шундай һүҙҙәре архивта һаҡлана: "Свободный, гордый, свободолюбивый башкир покорился. От смышленного, гордого башкира ничего не осталось". Әммә быңдай торош һәр саҡ дауам итә алмай, кешенең булмышында йоҡомһорап ятҡан асылы, рухы барыбер ҡасан да булһа уяна...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң дә беленә. Хәҡиҡәт йылдар үткәс тә һәр нәмәне урынына ҡуйып, үҙенсә урынлаштырып бара. Бары тик был донъяла хаҡлыҡ барлығына ышанысты ғына юғалтмайыҡ. Шағир әйтмешләй:**

**Ләкин Тормош үҙе килеп тапты**
**Тарих ижадсыһы - халыҡты.**
**Ҡулдан инде бер кем алмаҫ тартып**
**Ҡорбан биреп алған Хаҡлыҡты!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Эх, эргәндә яратҡан ҡатының булһын ине ул. Бәрәңге әрсер өсөн генә булһа ла. Ҡашығаяҡ тирәһендә биленә алъяпҡысын быуған ҡатынын күҙ алдына баҫтырып маташты. Уныһы йәшлектә аҙашып ҡалған Әлфиәһенә оҡшағайны.*



– Башҡа юл юҡ. Аҡсағыҙ булһа, ҡашығыҙ үҙегеҙ менән ҡала. Юҡ икән, ҡашығыҙҙы һабынлы һыулы ошо банка төбөнә ҡырып һалығыҙ. Сара юҡ, хәл итегеҙ ҙә. - Вәт йүнһеҙ, ҡасан быуынһыҙ итергә белә. Шуһыҙ был алдаҡ шыма донъяны ыштанһыҙ ҡалдырып буламы ни, сауҙагәр булыуы ла енел түгелдер. Был һатыулашмай, был туйып кикерә. Уға мәҙәк, кемделер мәсхәрәләү ләззәте кәрәк. Ул ауылда шулай итеп үҙенең көсөн, өҫтөнлөгөн күрһәтә. Аҡса, аҡса! Ул хәл итә шул бөгөн барлыҡ мөмкинлекте лә, теләкте лә, хатта хыялды ла. Һинең малың юҡ икән алың да, ялың да, алырың да юҡ, кемгәлер хеҙмәт итәһең, баш эйәһең, ысынлап та сараң юҡ. Фәнил үҙенен былай уйлай алыуына аптырап та ҡуйҙы. Баш уйлай ала, мейе эшләй, бәлки, баш тәҙәтмәҫкә лә булалыр?

- Ә ике ҡашҡа ике шешәме? - Шамил ҡотороп китте.

- Арифметика буйынса шулай инде лә, тик сауҙа шарты буйынса тәүлек эсендә бер ҡаш ҡына валюта була ала. Иртәгә икенсе ҡашың мәни-мәни булыр.

Фәнил торҙо. "Мин ҡайтам", - тине Шамилға, тик үҙе ҡуҙғалманы. Ә дуҫының буш сыҡҡыһы килмәй ине.

- Минең ҡашҡа ғына алайыҡ улайһа, бер ярты етә лә инде безгә. Ҡаш та булдымы бер нәмә, үҫер әле.

- Юҡ, юҡ, бер ярты эләкмәй. Бербегеҙҙең берәр ҡашын ҡырһағыҙ ғына бер литр, тинем бит, - Хаммат тәкәббер Фәнилдең нисек тә һыныуын күргеһе килде. Шамил үтенеп Фәнилгә ҡараны:

- Тегендә Рафа картуф ҡыҙҙыра. Өмөтләнеп беҙҙе көтә.

- Көтә шу-ул, - тине лә Фәнил уң яҡ ҡашын һабынланы.

Эш бөткәс, йәки һынар ҡашлы ғына булып ҡалғас, ике шешә ҡуйынға ингәс, ҡайтырға сыҡтылар. Бер-ике аҙым атлағас, шым Фәнил ҡапыл кире боролдо ла сауҙагәрҙең ихатаһына янынан килеп инде. Ҡаймаҡ урлап толтолған бесәй кеүек күҙе йылтырап Хамматҡа тура ҡарап: "Мәсхәрәләнең, Хаммат ағай, бик түбәнһеттең. Был ҡаштар бик ҡимматҡа төшмәнен үҙенә, бурысты х... ҡайтарасаҡмын!" - тип уртансы бармағын күрһәтте. Хаммат ялт итеп боролоп ҡараны, уның ҡарашы әшәке, йөҙө ҡурҡыныс ине.

* * *

Рафа сыуал артынан картуфты тиҙ тапты. Таҫҡа һалып һыуҙа йыуып алды. Унан иҙәнгә йәйелеп ултырып әрсергә тотондо. Тик ҡалтыранған ҡулдары тыңлашманы. "Бәрәңге жарить итәм, барыбер ғашиҡ итәм", - тип эсенән таҡмаҡ әйтеп үҙе күңелен күтәрергә тырышты. Тик эше ырам ғына барманы. Өс картуфты көскә әрсегәндән һуң бөтөнләй хәлдән тайҙы, бармаҡтары тартышты. "Барыбер жарить итәм" тип йырын үҙгәртеп ҡараһа ла, таба төбөнә биш картуфтан артығы төшмәне. Эх, эргәндә яратҡан ҡатының булһын ине ул. Бәрәңге әрсер өсөн генә булһа ла. Ҡашығаяҡ тирәһендә биленә алъяпҡысын быуған ҡатынын күҙ алдына баҫтырып маташты. Уныһы йәшлектә аҙашып ҡалған Әлфиәһенә оҡшағайны, нишләптер. Мәктәп йылдарында уҡ яратышып йөрөгәйнеләр, әрмегә оҙатып ҡалғанда эҫенешкәйнеләр, ә һуңынан... уны көтмәй, Өфө ҡалаһында уҡығанында уҡ кейәүгә сыҡты ла китте. Хәҙер үҙен биш-алты йыллап күргәне лә юҡ, ә шулай хыялдарға бирелеп ултырғанында уҙ ҡатыны итеп һәр саҡ уны күҙ алдына баҫтыра. Кеше ҡатынын, дүрәк. Һе, ауылда күҙгә элерҙәй, дөрөҫөрәге, уларҙы үҙ итерҙәй башҡа гүзәл зат та юҡ. Хәҙер өсөһөнөң дә йәше уҙҙы, һөйөү туны туҙҙы, уҡаһы ҡойолдо. Мәрәкәсе Гәрәй әйтмешләй, башҡаны булдыра алмағас, кеҫәгеҙҙә ике шарик менән бильярд һуғып тик йөрөйһөгөҙ инде, буйҙаҡтар.

Аптырағас, ҡалған йыуылған бәрәңгеләрҙе урталға ярҙы ла шул килеш кәстрүл төбөнә һалды. Һыу ҡойоп, электр плитаһын тоҡандырҙы. Эһе-һей, мундирға етәме ни ул! Бар витамины үҙендә, тәмле лә, туҡлыҡлы ла. Беҙгә ошо ла таман. Бының өсөн янында бисәң булыуы ла кәрәкмәй. Быны хатта ашамай, эскәндән һуң еҫкәп кенә ултырғанда ла була. Ер эсе бында.

һең, ергә йәбешкән, тәүәккәллектәре етмәй. Леспромхоз, бәлки, яңынан терелер, тигән буш өмөт тотамы үҙҙәрен, тыуған ер йылыһымы?

Тегеләрҙең ҡулындағы ике шешәне күргәс, Рафаның күнеле бермә-бер күтәрелде. Быныһы нимә, тип тоҡто ҡапшап ҡараны. Таяҡ килеп сыҡҡас: "Оһо, һарыҡ та иҫән, бүре лә туҡ икән, икәүҙе тапҡандар, маладса", - тип өҫтәлгә биш бөртөк әрселгән һәм мундирлы бешкән бәрәңгеләрҙе киң тәрилкәгә бушатты. Фәнил таяҡты үҙе эргәһенә алып ултырҙы.




Ер эсе, тигәндәй. Фәнилдең олатаһы Ситдиҡ ҡарт ҡараған посадкаға һигеҙенселә уҡығанда ярҙамға барғайнылар. Рәүеф шунда эләгеп йығылды ла танауын иҫке бер төмөзгә бәрҙе. Китте танау ҡанап. Салҡатан ятып та, танауына ҡульяулыҡ ҡыҫтырып та ҡарай, ҡан һис туҡтарға уйламай. Ситдиҡ ҡарт, ошонон менән томалаһаң туҡтай ул, тип танауын тупраҡ менән һылап ҡуйғайны. Тәүҙә ҡан тупраҡты ла дымлатып килеп сыҡҡайны, бер аҙҙан барыбер туҡтаны. "Әйтәм бит, тыуған ер һәр нәмәгә шифа", - тип көлдө Фәнилдең олатаһы. Ә Рәүефтең тамағы төбөндә уҡмашҡан ҡан менән бергә ана шул урмандағы ер тәме лә ҡалды. Эй, ул саҡтар. Өс таған булдылар Федя, Шома, Рафа. Әле лә бергәләр. Өсөһө өс урамда йәшәһә лә, нишләптер мәктәптә өсөһө айырылмаҫ дуҫтарға әйләнде лә киттеләр шул. Ғәҙәттә, бер урамда үҫкәндәр дуҫ була ла инде, ә былар, киреһенсә, тирәйүндәге малай-шалайҙы улай уҡ үҙ итмәй, өсөһө бер-беренә тартылды ла ҡуйҙы. Дүртенселә Рәүеф Кәҙә ташына барғанда һыуҙа ағып китә яҙған Шамилды тартып сығарып ҡалғайны. Шул яҡынайттымы? Фәнилдең әсәһе менән Шамилдың әсәһе - әхирәттәр, шуға улары ла яҡындармы? Нисектер өс таған-терәү барлыҡҡа килде лә ҡуйҙы. Араларында атаман булманы, Шамил - хисле, шиғыр, ат тип йәшәне; Фәнил иһә телһеҙ, тик һәр эшкә маһир; Рәүеф үҙе төрлө нимәләр уйлап табыуға шәп ине. Өсөһө лә тарта-һуҙа мәктәп бөттө, леспрохозға эшкә урынлашты. Урман яттар ҡулына күскәс, былар эшһеҙ ҡалды. Ҡайҙа ҡалым, шунда инде хәҙер бар кәсептәре. Ата-әсә елкәһендә яталар, тип әрләүселәрҙең һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ бар. Ситкә сығып китеп эш табырға ине лә, итек табандары, әйтер-

Эҫе бәрәңгеләрҙе Шамил усында һикерткеләп алды, Фәнил ғәҙәттәгесә башын эйәгенә ҡуйып шымды. Шунан ғына Рафа тегеләрҙең һынар ҡашлы икәнен шәйләп ҡалды ла аҡырып көлөп ебәрҙе: "Ну һеҙ, самурайҙар, юлығыҙға үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт сығып, мәсхәрәләп киттеме әллә, ярай ҙа баш тирегеҙҙе тунап алмаған!"

- Көлмә, ана был шешәләге шыйыҡса беҙҙең ҡаш бөртөктәренән йыйылған, - тине Шамил, сәмәйҙе һауыттарға ҡоя-ҡоя.

- Аңлап етмәнем мин, ағыу алып килмәгәнһегеҙҙер бит, - Рафа аптырап ҡараны.

- Хаммат сволочь ике ҡашҡа бер литр бирҙе, шул.

- Бушлаймы? Ҡырһағыҙ, бирәм теймә?

- Буш буламы ни? Бер ҡашҡа - бер ярты, тим бит.

- Мин уны посылать иттем, таҙа намыҫым менән эсәң дә була, - Фәнил ҡалҡынып, төбөнәсә күтәреп ҡуйҙы. - Былай арыуын биргән икән, - танауына бәрәңге килтерҙе. - Эсе, ләгнәт.

Дуҫтары ла тотто.

- Әсерәк булһын өсөн тауыҡ тиҙәге ҡушҡан был, иртәгә башты хәрәсәк икән, - Шома уҡшый-уҡшый кире йотоп ебәрҙе. - Төшөп китте шикелле.

- Һеҙҙе мәсхәрәләгән ул Хаммат. Мин һис кенә лә ҡашты ҡырҙырмаҫ инем, башты бирһәм бирер инем, - Рәүеф шап итеп стаканды өҫтәлгә ҡуйҙы.

- Быны һинә мә! Рафа тегендә картуф жарить итеп көтә, тип ҡашһыҙ ҡалдыҡ, ә ул нимә тей, ҡырҙырмаҫ инем, имеш. Беҙ тәүҙә һине уйланыҡ, - Шома ярһып китте.

- Барыбер ҡырҙырмаҫҡа кәрәк ине. Ҡаш ул... - ҡапыл ни әйтергә белмәне.- Ҡаш - күҙ өҫтөндәге ниһы, бриллиант бит ул. Унан ҡалһаң, барыһынан да яҙаһың, тигән һүҙ. Их, һеҙ! Әйҙә, барып ауыҙын иҙәйек, үҙенең ҡашын емерәбеҙ спекулянттың!

- Ҡыҙҙы берәү, - һәр ваҡыттағыса Федя тыныс ине. - Алдында бар, ашап-һыйланып тик ултыр.

Хамматты әрләнәләр ҙә, эстәрен йылытып ебәрҙе уның төндә тамсылап йыйған шайтан һыуы. Шамил ғәҙәттәгесә урынынан тороп шиғыр уҡымайынса булдыра алманы:

*- Булманы был тормош! Булды бары*
*Ниндәйҙер бер тормош йораты...*
*Ярай әле тиҙерәк китер өсөн*
*Ярһып тора тышта туратым...*
*Ҡалайыраҡ ауыҙламаҡ була,*
*Ҡалай тотмаҡ була теҙгенде...*
*Мә, тот! Ос, Турыҡай, ос әйҙә, ос!*
*Үткәрербеҙ ҡырҙа беҙ төндә.** Эһеһей, әйҙәгеҙ берҙе турат өсөн, Радулов өсөн түңкәрәйек әле.

Түңкәрҙеләр. Ишәк өсөн дә күтәрерҙәр ине, сөнки үҙ урынына йәтеш кенә ятты быныһы ла. Ҡысытып торған тамаҡҡа хәҙер барыһы ла һәйбәт бара ине. Иҫерә башлағас, Рафа тағы баяғы һүҙҙе терелтте:

- Дуҫтарым минең, ҡаш яңынан үҫә ул, ә бына мәсхәрәнең ҡойроғон тиҙ генә өҙөп ташлап булма-ай.

- Нимә, беҙҙән көлмәксеһеңме? Әйҙә, һинекен дә ҡырабыҙ улайһа, - Шамилдың теле көрмәләнде.

- Юҡ, дуҫтарым минең, нишләп көлә тей, үҙен мәсхәрәгә ҡалдырырға кәрәк ул Хамматтың.

- Мин уны өс хәрефкә күптән оҙаттым да, оноттом да, - Фәнилдең дә тауышы сыҡты.

- Мин, дуҫтарым, һеҙҙең өсөн үҙем үс алам.

- Нисек?

- Уның мунса ташына тауыҡ тиҙәге һибәм. Ой, башына еҫ тейәсәк, ой, тейәсәк. Һәм капут буласаҡ.

Өс дуҫ "Башына еҫ тейәсәк, ой, тейәсәк" тип таҡмаҡлап тағы бер һалынғанды күтәрҙе. Билдәле, һипмәйәсәк улар, юҡ, тәүәккәллек етмәгәндән түгел, бер ҡаш өсөн былай үс алырға күнелдәре, әле үтә бысранып өлгөрмәгән намыҫтары рөхсәт итмәйәсәк. Башҡа баш етмәҫ мәсхәрәһе булмаһа...

* * *

Иртәгәһенә дуҫтар тағы ла ныҡыраҡ ауырып таралышты. "Ысынлап та тауыҡтыҡын ҡушҡан был сволочь!" - тип Хамматты әрләнеләр. Фәнил генә, ул ауыҙға ҡойманы, шыңшымағыҙ, тип тыйҙы.

Шамил ике көн тағы ла ауырып ятты әле. Тамағына аш барманы, баш тәҙәтеү тураһында уйлай ҙа алманы. Берҙән, барыбер табып булмаҫ ине, икенсенән, сәмәйҙең еҫен тойоу менән уҡшырға тотондо. Күргеһе лә килмәй ине төндә тыуған әсе, һаҫыҡ нәҫтәкәйҙе.

Фәнил дуҫы ике тапҡыр килеп хәлен белешеп, дөрөҫөрәге, үҙенең хәлен белдереп китте. Аяҡтамын, йөрөрлек кәр бар, ә һин ятаһың, йәнәһе. Сәғәт тирәһе әйҙеген усына һалып бер һүҙ өндәшмәй, тып-тын ултыра. Шунан ғәҙәттәгесә өҫтәлдә торған банканан күтәреп һыу эсә лә, ярай, ҡайттым, һин теге... минең олатай артынан китеп барма ҡабаланып, тип көлөмһөрәй тағы. Икенсегә килгәнендә олатаһының таяғын кисәге тоҡҡа яңынан урап алды. Торған урыны шунда булғандыр, һарай мөйөшөнә һөйәйем, тип сығып китте.

**(Дауамы бар).**

* Әҫәр геройы Рафаэль Сафин, Рәми Ғарипов, Сергей Есенин, Мәжит Ғафури, Ғилман Ишкинин, Борис Слуцкийҙарҙың шиғырҙарын телгә ала.

АФАРИН!

# "ҠУҢЫР БУҒА" ЮЛЫНДА...

## ижадсылар берләшә

**Ҡурташ, Ямантау, Ирәмәл, Рәз, Ҡағыташ... Яңғырауыҡлы исеме тауҙарҙан ҡайтауаз булып ҡаҡлыҡкан, үткән юлында йәйғорҙоң бар төҫтәрен сағылдырған "Ҡуңыр буға" Ҡыркты һырттарын артылып, Уралтау менән Көньяҡ Ҡыраҡа киҫешкән армытҡа яҡынланы. Донъя иңләп, деүләп килә, тип әйтеүем.**

Йөрьәт итеп, әҙәби ойошмаға "Ҡуңыр буға" тигән сағыу исем һайлауҙары башта бер аҙ сәйер тойолғайны. Аныҡ, әҙмә-әҙлекле эштәре, виртуаль донъяла улар тураһында фотоотчет бирелә барыуыу ваҡыт үтеү менән был төбәк йәмәғәт ойошмаһының әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт өлкәһен берҙәй берләштереүсе үҙәк икәнен күрһәтте. Ойошма ағзаларының ижад лабораторияһы майҙаны киңәйә бара һәм майҙан тотоусылар (мәктәп уҡыусыһынан хаҡлы ялдағыларғаса) үҙҙәрен төрлө ракурста һынап ҡарай. Һәм был бихисап эштәр фәнни-ғәмәли конференция, ижад һәм хәтер кисәләре, әҙәби ултырыштар, Ҡөрьән сүрәләрен яттан һөйләү конкурсы, әҙәби премиялар лауреаттарын билдәләү саралары аша сағылыш таба. Йылдын-йылы уҡыусылар араһында ла бәйгеләр үткәрелеп, әҫәрҙәрҙең иң-иңдәре балаларҙы күтәрмәләү хәйриә фонды тарафынан баҫтырылған "Өлкәр" йыйынтығында донъя күрә.

Былтырғы йыл аҙағында "Өлкәр" һәләтле балаларҙы күтәрмәләү хәйриә фонды, "Ҡуңыр буға" ойошмаһы менән берлектә, Шәғәли Шаҡмандың 500 йыллығын иҫкә алыу һәм Башҡортостан Республикаһының 100 йыллыҡ юбилейы айҡанлы әҙәби конкурс үткәрҙе. Ҡатнашыусылар географияһының сит өлкәләргәсә һуҙылыуы конкурсты мәртәбәле итте. Баһалама комиссияһы бәйгегә килгән 30 эш араһынан поэзия һәм проза номинацияларында еңеүселәрҙе билдәләп, Учалы филармонияһында ойошторолған кисәлә тәбрикләне һәм аҡсалата премия тапшырҙы.

Поэзия өлкәһендә:

I урын - Әбйәлил районынан Айһылыу Хәсәноваға,

II урын - Белорет районынан Әнисә Аҫылғужинаға һәм Әбйәлил районынан Әнисә Мәхийәноваға,

III урын - Әбйәлил районынан Илсиә Ҡасимоваға, Учалы районынан Рәмзилә Кәлимоваға, Бөрйән районынан Айгөл Сөләймәноваға бирелде.

Проза өлкәһендә:

I урын - Бөрйән районынан Миңнур Ҡасимоваға,

II урын - Яр Саллы ҡалаһынан (Татарстан Республикаһы) Мәүлиҙә Әхмәтйәноваға һәм Әбйәлил районынан Радик Өмөтҡужинға,

III урын - Баймаҡ ҡалаһынан Борис Хәйретдиновҡа, Бөрйән районынан Ҡәҙриә Ҡасимоваға һәм Белорет ҡалаһынан Светлана Ғиләжеваға тапшырылды.

Тәбрикләү тигәндән. Ентекле анализ, тәнҡиткә лә урын булды әҙәби ултырышта. Ойошма етәксеһе Мәүлит Кәримов әйткәнсә, кемдер положение менән ныҡлап танышып та тормай, һуңлаған поездың ҡуҙғалған ваҡытында эш ебәрә. Ә шулай ҙа... Күнелдә баҙлаған осҡондо сағыу итеп балҡытыр көс бар был ойошмала. "Бөгөн дәүләт тарафынан да, бизнес тарафынан да ижад кешеләренә иғтибар кәмегән заманда "Ҡуңыр буға" ойошмаһы, Башҡортостандың аҫыл Мәүлиттәре баһалап бөткөһөҙ ҙур эш башҡара. Ихлас рәхмәт һеҙгә. Изге кешеләр һеҙ барығыҙ ҙа. Шундай ауыр заманда ла яҙыусыларыбыҙҙы, йәштәрҙе ҡыуандырып саралар үткәрә алыуығыҙ һәр саҡ һоҡландыра. "Ҡуңыр буға" оҙаҡ-оҙаҡ йыллар йәшәһен!"- тип яҙа интернет селтәрендә йәш шағир Алмас Шаммасов.

Ысынлап та, "Ҡуңыр буға" төбәктәге күңелендә ижад ҡомары булғандарҙы туплаусы, үҙ көсөнә инандырыусы бер мөғжизәле үҙәк ул. Ә ойошманы бар итеп, йәшәү көсө биреп тороусыларҙың береһе - ул танылған яҙыусы Мәүлит Ямалетдинов. Уның әләнән-әле: "Һинең был донъялағы дәрәжәң үҙең киткәс тә онотолор. Яҙғандарың - кешеләрҙе ҡыҙыҡһындырырлыҡ булһын. Ҡулығыҙҙа ҡәләм тотор көс барҙа, ялҡауланмай эшләгеҙ. Яҙыуға иғтибарлы булығыҙ. Әле яҙа торған сағығыҙ", - тигән һүҙҙәре менән дәртләндереп, илһамландырып тороуы күптәрҙе ошо үҙәк тирәләй тупланыуға әйҙәй ҙә инде.

**Миңнур ҠАСИМОВА.**
**Бөрйән районы**
**Әбделмәмбәт ауылы.**



ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Сәйер кеше

Ильяс бабайҙы белдем. Ул гел үҙенсә йәшәне, башҡаларға ылығып барманы, мәгәр ҡырҡа айырымланманы ла. Берәй йыйылыш була ҡалһа башҡаларҙың сығышын ҡеүәтләмәй фәҡәт үҙенең фекерен әйтә, әле тикшерелгән мәсьәләгә ҡарашын еткерә, мәжлестәрҙә лә бергәләп башҡарылған йырҙарға ҡушылмай, башҡалар туҡтап тын ҡалғас ҡына яратып башҡарған көйөн һуҙып ебәрә, колхоз өмәһенән ҡайтҡанда ла кеше арбаһына ултырмай йәйәүләп атлай. Сәйер кеше һымаҡ күренде ул миңә. Хәҙер кеше сәйнәгәнен тыңҡып, башҡалар әйткәнде тыңлап, баш һелкеп ризалашып көн итәбеҙ, туранан ярып, күҙгә бәреп әйтер һүҙебеҙ юҡ. Булған хәлдә лә башҡалар шым ултырғас, усыбыҙ менән ауыҙыбыҙҙы томалап тын ҡалабыҙ. Ә Ильяс ҡарт тере булһа, һаман да үҙ һүҙен тотоп, үҙе генә белгән көйҙө көйләп йөрөп ятыр ине, моғайын. Баҡтиһаң, ул сәйер кеше булмаған икән дә баһа!

### Ҡайһы алма тәмлерәк?

Мәжлестә ултырабыҙ. Өс-дүрт йәшлек ҡыҙ бала тотош табындың йәме: ҡайҙа теләһә, шунда ултыра, ни теләнә килә, шуны тәтелдәй. Үҙен ҡурсаҡтай матур итеп кейендергәндәр бит әле. Бына ул тартыныуһыҙ үрелеп өҫтәлдәге һауыттан ике ҡулына ике алманы эләктерҙе. "Ҡыҙым, ошо алманың ҡайһынынһын яратҡан әсәйеңә бирәһең инде?" - тине йәш ҡатын ҡыҙының йомартлығын, фәҡәт уны ғына ятратҡанлығын күрһәтергә теләп. Ҡыҙ уртаға сығып баҫты ла иң башта бер алманы тешләп алды, шунан икенсеһен. Ә үҙе ниҙер хәл иткәндәй урынынан ҡуҙғалмай. Башҡалар алдында ҡыҙының уңайһыҙ хәлгә ҡалдырыуын һиҙҙерергә теләмәгән әсә һылтауын табып аш бүлмәһенә ашыҡты. Бер аҙҙан кире күренгәйне, урынынан ҡымшанмаған бала ике алманың береһен әсәһенә һонодо:

- Әсәй, мин емештәрҙең икеһен дә тәмләп ҡараным, бынау татлырағы һинә булһын!

Көтөлмәгән тәҡдимдән юғалып ҡалды йәш әсә, шунан балаһын ҡосаҡлап алды. Уның күҙҙәре йәшләнгәйне...

### Ятһырау

Институттан һуң яҡташым менән совхоз үҙәгендә эш башланыҡ. Бергә уйнап, аралашып үҫмәгәс, аралашыуыбыҙ ҙа рәсми танышлыҡ сиктәрендә генә ине. Күрше ауылдан ине ул. Мин парткомда йөрөйөм, яҡташым малсылыҡта. Ғәҙеллек йәһәтенән шуны билдәләп үтергә кәрәк, яҡшы белгес ине ул, оҫта ойоштороусы. Кешеләр менән дә ихлас мөғәмәләлә булып уртаҡ тел таба белде. Ҡайнылыр мәлгә тиклем генә ул үҙен ошолай тотҡан икән. Юғарыға ынтылыу, үңыштарға өлгәшеү һәйбәт әлбиттә, әммә теге яҡшыны ямандан айырмай, юлдарын табып, танышлыҡтарын эшкә ҡушып, башҡаларҙы тапап, терһәге менән этеп карьера баҫҡыстарынан үрләргә кереште, һәм, ниһәйәт, маҡсатына ирешә: районда ҙур ғына етәксе булып китте. Әҙәмдең кемлеген белгең килһә, уны түрә итеп ҡара, тиҙәр бит, ул ошо юғары урынын үҙенә күрә тәхеткә әүерелдерҙе, кешеләрҙең хәленә инеү, уларға ярҙам итеү генә түгел, бер кемде лә танымай башланы, иҫәнләшеүҙең ни икәнлеген онотто. Донъя ҡуласа бит, хәҙер ул күптән инде ҙур түрә түгел, ябай ғына итеп кейенеп һин дә мин башҡалар араһында йөрөп ята. Таныштарын шәйләп ҡалһа, әллә ҡайҙан лауылдап сәләмен бирә, килеп ҡосағына ҡармауы ла бик ихтимал. Тик уны ҡабул итмәйҙәр хәҙер, яһалма ихласлығын өнәп еткермәй ,ятһырап ҡарайҙар.

Бик тә дөрөҫ әйтәләр шул - тауҙан төшкәндә ҡулдарын һоноп ярҙам итеп торһондар өсөн үрләгән саҡта юлыңда осраған кешеләр менән сәләмләшергә кәрәктер.

### Һүҙ хаҡы

Баҙар ҡанундары тотошлайы менән тормошобоҙҙо биләп алды. Етештереү урындары урынына ҡайҙа ла сауҙа нөктәләре асыла. Бик күптәрҙен, айырыуса баҙар шарттарына ҡулайлашып өлгөргән йәштәрҙең йәшәү рәүеше - һатыу, һатып алыу, һәм шул һатып алынғанды тағы ла ҡимммәтерәккә кемгәлер осороу, елгәреү. Ҡуласала әйләнгән тейен һымаҡ тәгәрәй тормош тәгәрмәсе. Баҙар, сауҙа тәгәрмәсе. Мәғлүмәт һатылған хәлдә лә бөгөн бер генә нәмә һатылмай. Ул да булһа, әйтелгән һүҙ. Уға әлегә хаҡ ҡуйылмаған. Әгәр һәр һүҙгә бәйә билдәләнһә, ҡойолдороп хәбәр һөйләүселәр ҡырҡа кәмер ине. Дөйөм тынлыҡ урынлашып та ҡуйыр ине, бәлки.

***✓ Район етәкселегә арҙаҡлы яҡташтарының исемен ауыҙ тултырып әйтә алыуға ла шөкөр итеп, гөрләтеп Аҡмулла көндәрен йыл һайын үткәрҙе һәм үткәрә бирә.***



ИНТЕРНЕТТАН



# КИС...

## эш өсөн түгел

■ Көн тәртибе - мөһим нәмә. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запаһын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙоң сифатын яҡшыртасаҡ ҡына. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләргә үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Өшөмәйем тиһәң, тәбиғи туҡымаларҙан тегелгән кейемгә өҫтөнлөк бирергә кәрәк. Тирләү - түбән температурала хәүеф тыуҙыра, сөнки организмды тағы ла ныҡыраҡ һыуыта. Шуға ла кейем һауаны яҡшы үткәрергә тейеш. Ҡаты һыуыҡтарҙа урамда оҙаҡ йөрөмәгеҙ, 30-40 минут та етә. Ҡыш юғары энергияға эйә ризыҡтар - аҡһымға, углеводҡа бай ризыҡ ашағыҙ. Ҡулдар, аяҡтар, бит, баш, ҡолаҡтар һәм танауҙы өшөтөүҙән һаҡларға. Өшөгәнһегеҙ икән, башта йылы һыу эсегеҙ. Организмды эстән йылытыу мөһим. Шунан һуң ғына йылы һыу менән йыуынырға, өшөгән тирене ҡороткансы һөртөргә. Тире ағарып, өшөүҙең билдәләре күренә башлаһа, табипҡа мөрәжәғәт итергә. Өшөү - тын юлдарына ла зарар килтерә. Һыуыҡ һауа менән тын алыу бронхит, үпкәләр шешеүенә, ауыр вируслы-бактериаль ауырыуҙар үҫешенә килтерә ала.

■ Ҡыш тире ныҡ кибә, шуға ла өҫтәмә иғтибар талап итә. Дөрөҫ туҡланыу был миҙгелдә айырыуса кәрәк. Кишер С, А витаминдарына бай. А витамины һырҙар барлыҡҡа килеүҙе кисектереп тора. Әфлисун да составында С витамины күп булыу менән дан тота, ул тирене һаҡлай. Авокадо - иң файҙары ризыҡ иҫәпләнә. Унда Е витамины бар, ә был витамин тире матурлығы өсөн бик кәрәк. Майлы балыҡ омега-3 майлы кислоталары менән файҙалы.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, матди байлыҡҡа ынтылған кешеләр өсөн ғаилә бер ҡасан да беренсе урынға сыҡмаясаҡ. Бынан тыш, ундай кешеләр никахта үҙен бәхетле тоймай ҙа. Матди байлыҡ йәшәйештең башҡа мөһим өлкәләрен ҡыҫырыҡлап сығара икән. Аралашыу, конфликттарҙы хәл итеү, мөнәсәбәттәрҙең йылылығы икенсе планға күсә. Ир йәки ҡатын байлыҡҡа ынтыла икән, уларға кешеләргә ҡарағанда әйберҙәр күберәк күңел тыныслығы һәм ҡәнәғәтләнеү тойғолары килтерә. Шуға ла улар ғаиләне һаҡлап ҡалыу өсөн артыҡ көс түкмәй ҙә.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты ғалимдары билдәләүенсә, һейҙек ташы ауырыуы менән ауырыған сирлеләр һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, бығаса тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



# АҠМУЛЛАНЫҢ ТУРА ҺҮҘЕ...

## берәүгә им, берәүгә ыу

**Аҡмулланың исеме һәм шиғырҙары әүәлдән халыҡ телендә тирбәлгән булһа ла, тыуыуына 150 йыл тулыу уңайынан, 1981 йылда уның шиғри йыйынтығы донъя күргәс, бөтә Башҡортостан тетрәнде. Бындай бүләк, асыш, табыш - күк ҡабағы асылыу менән бер ине.**

"Аҡмулла. Шиғырҙар" китабының төҙөүсеһе, аңлатмалар һәм баш һүҙ авторы Әхәт Ханнан улы Вилданов үҙенең ғалимлыҡ эҙмышында ифрат бәхетле, ҡатмарлы һәм яуаплы эш башҡарғанын бик тә белгәндер. Хәтерәмдә, беҙ ҡәҙерле китапты ныҡ тулҡынланып, "бисмилла" тип ҡулға алдыҡ, тәүге биттәге портретын - ҡама бүрекле, йыйнаҡ һаҡал-мыйыҡлы, галстуклы сибәр ир-егет рәсемен дә, икенсе биттәге графика менән төшөрөлгән сәлләле һәм китаплы кеше ҡиәфәтен дә - һис шикһеҙ шағирҙың һүрәттәре тип ҡабул иттек. Халыҡтың рухы һәм аңы Аҡмулланы һағынған, сарсаған, эҙләгән саҡта Әхәт Вилданов әҙерләгән йыйынтыҡ бик ваҡытлы булды, ул, гүйә, Аҡмулланың ижадын ҡаплап торған ҡоршауҙы алып ташланы.

Ошо 1981 йылда Аҡмулланың яҡташтары оло ҡунаҡтар саҡырып, шағирҙың ижадына һәм тормошона арналған тәүге йыйындарҙы үткәрә башланы. Беренсе лауреат ғалим һәм шағир Рәшит Закир улы Шәкүров булды. Ул 1980 йылда Мифтахетдин Акмуллланың шағирлыҡ һәм мәғрифәтселек юлын яҡтыртҡан "Шәреҡ йондоҙо" һәм "Быуат аша артылыу" тигән фәнни монографиялар яҙып, донъяға сығарҙы. Был ентекле ғилми хеҙмәт Аҡмулла йондоҙон янынан ҡабыҙҙы, тиергә була. Аҡмулланы халыҡҡа кире ҡайтарыу - тау аҡтарып Йәншишмә һыуына юл асыуға тиң шул. Бынан ары Йәншишмәне уртлаған һәр кемдең теле асыла, күҙе асыла, йөрәге асыла башлай...

Ни өсөн ул маҡтаулы исем район кимәлендә генә бирелә, ниңә республика һәм дәүләт премияһы булараҡ күтәрелмәй, тигән аптырашлы һорауҙарға миәкәләр яуап эҙләп йәки көтөп торманы. Район етәкселегә арҙаҡлы яҡташтарының исемен ауыҙ тултырып әйтә алыуға ла шөкөр итеп, гөрләтеп Аҡмулла көндәрен йыл һайын үткәрҙе һәм үткәрә бирә. Ул байрамға яҙыусылар, артистар, композиторҙар, рәссамдар, ғалимдар, журналистар саҡырыла. Аҡмулла премияһы лауреаты исемен йөрөтөүгә башлыса сәнғәт, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт өлкәһендә Аҡмулла ижадын өйрәнеүсе, пропагандалаусы, үҫтереүсе кешеләр лайыҡ була.

Һуңғы йылдарҙа Миәкә районы етәкселеге һәм лауреаттарҙы билдәләү комиссияһы үҙҙәренең тыуған төбәге өсөн хәйерле һәм әһәмиәтле эштәр башҡарған яҡташтарына иғтибар йүнәлтә. 2016 йылда улар Аҡмулланың тыуған ауылы Туҡһанбайҙа уның музейын төҙөүгә ҙур өлөш индергән Вәсил Ғарип улы Хәсәновты лауреат исеме биреп ҙурланы. Элекке "Большевик" колхозы етәксеһе Вәсил Ғарип улы ысын мәғәнәһендә Миәкә патриоты - асфальт юлдар, күперҙәр, мәктәптәр һәм мәҙәни усаҡтар - тормош гөрләп торһон өсөн яҡташтарына бөтә шарттар булдырырға тырышҡан хужаларса төплө һәм алдынғы ҡарашлы ил ағаһы ул. Гөмүмән, Аҡмулла бүләге лауреаттары араһында ун ике кеше - Дим, Өршәк, Өйәҙе йылғаларын һыулап үҫкән һәм тыуған ерен, республиканы үҙенең һәләте, ижады, хеҙмәте менән һоҡландырған шәхестәр. Уларҙы бөйөк Аҡмулла менән йәнәш ҡуйған миәкәлеләр Рәхмәт һәм Хөрмәт кисәләрен ошо арҙаҡлы яҡташтарына арнап үткәрә. Ысынлап та, тыуған ер фатихаһы - иң юғары баһа һәм ҡыуаныс.

Быйыл 2018 йылғы дәрәжәле исемгә хаҡлы рәүештә лайыҡ булыусы кеше шулай уҡ миәкәләрҙең "үҙ геройы". 1980 йылдарҙа, бөйөк мәғрифәтсенең тыуыуына 150 йыл тулған ваҡытта, Миәкә районы тарафынан "Аҡмулла исемендәге премия булдырыу" ҡарарына ҡул ҡуйя ул. Был легендар шәхес - Хәбир Хәләф улы Мусин. "Мин бөтә белемемде, йәшлегемде, иң фиҙаҡәр хеҙмәтемде тыуған яғыма бирҙем, шуның менән бәхетлемен - тыуған төйәгемә, кешеләренә хеҙмәт иттем", - ти ике тиҫтә йыл буйы район етәксеһе булып эшләгән уҙаман. Яҡташтары, замандаштары алдында йөҙө яҡты Хәбир Хәләф улының, был йылдарҙа төбәктә ауыл хужалығы, төҙөлөш һәм мәҙәни тормош алға китеүен кешеләр әле лә хәтерләй.Уның етәксе булараҡ эшмәкәрлеген дауыл ҡупҡан дингеҙ буйлап барған карап капитанының сая һәм аҡыллы идара итеүе менән сағыштырып булыр ине. Советтар Союзы тигән оло ил тарҡалып, үҙгәртеп ҡороу һәм яңы иҡтисади мөнәсәбәттәр ваҡытында миәкәләрҙе замана ауырлыҡтарына бирешмәй алға - етеш һәм тыныс тормошҡа әйҙәүсе булды ул.

Аҡмулла көндәрендә Миәкә районы тағы ла элекке лауреаттарҙы ихлас ҡаршыланы. Улар тәүҙә Туҡһанбайға ашыҡты. Аҡмулла музейына ингән ҡапҡа алдында килеүселәрҙе ҡаршылап торған шағир бюсы янына сәскәләр һалыу - традицион, ләкин

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ТАМБУР СИГЕҮЕ...

## төньяҡ-көнсығыш башҡорттары шөғөлө

**Бөгөнгө көндә ололар ғына түгел, йәштәр ҙә этник, миллилек сағылыш тапҡан кейем-һалымға өҫтөнлөк бирә. Башҡорт милли кейеме лә мода үҙәгендә, боронғоға оҡшатып та, стилләштереп тә тегелгән күлдәк, биҙәүестәр киң ҡулланыуҙа хәҙер. Балаҡатай районы Билән ауылында йәшәүсе Сәйҙә Әхтәмова менән шул төбәк башҡорттарына хас милли кейемдәр һәм уларҙы эшләү серҙәре тураһында һөйләштек. Сәйҙә Мөхәмәтғәли ҡыҙы йыш ҡына төрлө күргәҙмәләрҙә ҡатнаша, ауылдарында эшләгән "Тамбур" биҙәү-ғәмәли сәнғәте халыҡ студияһы һәм "Серҙәш" халыҡ фольклор ансамбленең әүҙем ағзаһы.**



тулҡынландырғыс күренеш. Музейҙағы тәүге этнографик бүлек һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныу менән ҡарала. Музей эшен етәкләүсе Фәнис Янышев иң тәүҙә М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының художество-графика бүлеге студенттары эшләгән панноны ҡарарға саҡыра: ул башҡорт тамғалары менән биҙәлгән, яңы тыуған сабыйына әйелгән йәш ғаиләнең ошо милли биҙәктәр аша бала тәрбиәләүе, уға донъя танырға, кешелек ҡиммәттәрен аңларға өйрәтеүе тасуирлана, тип бирелеп аңлата ул тыңлаусыларға. Үҙ эшенә мөкиббән бирелгән музей мөдиренең мәғлүмәте күңелгә уйыла. Икенсе залда ҡуйылған картиналарҙа, китаптарҙа, макеттарҙа, ҡул эштәрендә Аҡмулланың ижади дуҫтары, яҙмышындағы хәл иткес боролоштар, һынауҙар сағыла. Ғөмүмән, һәр экспонат тәрән йөкмәткеле тарихҡа тоташа.

Артабан ҡунаҡтарҙы Сәфәр мәктәбендә көтәләр. Аҫалы балаҫтар эленгән, бәйләм оҫталары эше теҙелгән күргәҙмә буйлап Рузимә Иркәбаева ҡыҙыҡлы сәхифәләр һөйләп бара. Клубтағы бай китапхана уның тырышлығы менән әүҙем эшләп тора икән. Уҡыусы балалар күңелле йыр менән сәләмләй. Уңайлы тамаша залының сәхнәһендә быйылғы лауреат Хәбир Мусин менән бергә район хакимиәте башлығы Ришат Ғәбдрәшит улы Аҡтуғанов, ауыл биләмәһе етәксеһе Тимерйән Лотфуллин урын ала. Иң ныҡ хәтерҙә ҡалғаны - ауылдың ҡатын-ҡыҙҙары башҡарыуында көйлө нәсихәттәр, мөнәжәттәр. Уларҙың һүҙҙәре, әлбиттә, Аҡмулланыҡы. Урындағы халыҡтың күңелендә һаҡланған был милли хазина бер кемде лә битараф ҡалдырмай. "Барлығы бер йөҙ утыҙ ғына кеше йәшәгән, ун өс кенә йорт булған Туҡһанбай ауылынан бөйөк шағир - ил мәғрифәтсеһе үҫеп сығыр тип кем уйлаған? - тип башлай һүҙен тантаналы кисәне алып барыусы уҡытыусы Фәйрүзә Абдулова. - Аҡмулла шиғриәте - ваҡыт сиктәрен белмәҫ ғәжәйеп аһәңле заң, рух шишмәһе. Үҙенән ҡалған ижад емештәренең ҡөҙрәтле көсөн белгән Аҡмулла һәм былай тип әйтеп ҡалдырған:

*Ҡараһаң, Аҡмулланың*
*шиғыры был,*
*Эсендә - һыуһағанға*
*шәрбәтле һыу;*
*Битенең береһе көләр,*
*береһе һүгер,*
*Тура һүҙе - берәүгә им,*
*берәүгә ыу!*

Аҡмулла шиғриәте бөгөн дә беҙҙең өсөн зиһен-күңелдәребеҙгә шәрбәтле һыу ҙа, наҙан менән аңһыҙҙы һүгер үткер һүҙ ҙә, уйлы-эшлеклеләребеҙҙе алға әйҙәр хитап та, икеләнгән-ҡаушаған йәндәргә им булыр хикмәтле һүҙ ҙә... Киләсәктә лә шулай буласаҡ. Аҡмуллабыҙ үҙ туған башҡорт халҡының ғына түгел, бик күп туғандаш халыҡтарҙың оло ихтирамына, ихлас һөйөүенә һәм рәхмәтенә лайыҡ даукәр шәхес булып ҡаласаҡ!" Шулай тип ҙурлай шағирҙы Миәкә халҡы.

Район үҙәге Ҡырғыҙ-Миәкәләге мәҙәниәт һарайында үткән тантанала хакимиәт башлығы Ришат Аҡтуғанов сираттағы Аҡмулла премияһы лауреатын иғлан иткәс, бөтә зал дәррәү аяғүрә баҫып, оҙаҡ алҡыштарға күмде был яҡты мәлде! Хәбир Хәләф улы хәҙер ун йылға яҡын хаҡлы ялда, үҙенең тыуған ауылы Күл-Ҡаранда донъя көтә. Уның менән иңгә-иң бергә эшләгән ҡорҙаштары зал тулып ултыра. Был тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына ҡиәфәтле кешенең кем икәнен улар бик яҡшы беләләр. Бер ниндәй замана болғаныуына ҡарамай, "ил таянысы - намыҫлы ир" тип, Аҡмуллалай тоғролоҡ һәм ҡәтғилек менән илгә хеҙмәт иткән саф күңелле, аҡ уйлы етәксе ул.

Миәкәләге Аҡмулла байрамы - үҙ баланды, шәхесеңде, тырыш һәм уңған яҡташынды ололау һәм хуплау көндәре ул. Хөрмәт һәм Рәхмәт кисәһенә әүерелгән тантана ун ике йәшлек йырсы Искәндәр Тазетдиновтың "Тыуған ерем" тигән сағыу йыры менән тамамланды - республика йыр бәйгеләренә уның илһамлы тауышы иң юғары баһа алып ҡайтҡан. Тамашасылар ошо йәш һәм саф тауышлы баланы данлай, уға бәхетле ижади үрҙәр юрай... Халыҡ борондан әйткән: "Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр, тиер, матур, тиер, ҡотло, тиер!" Аҡмулланың яҡташтары ла был йәһәттән күптәргә өлгө.



**Сәрүәр СУРИНА,**
**М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты.**

---

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәктәре беҙҙең яҡта шау сәскә, зауыҡлы итеп ҡайылған. Әсәйем Хәсәнә бик оҫта ҡайыусы ине, беҙгә бала саҡтан өйрәтте был һөнәрҙе. Фермаға һыйыр һауырға киткәндә: "Мин ҡайтҡансы, ошо урындан алып ошонда тиклем ҡайып ҡуй", - тип эш ҡуша ине. Баштараҡ ҡул эшен боҙоп та бөткөләнем, әсәй тиргәшеп тә ала торғайны. Ул миңә сәскәнең ситен генә эшләргә ҡуша торғайны, ә эс яғын ул үҙе тултырып ҡайый. Бындай ваҡ эш менән бала кешенең оҙаҡ ултырғыһы килмәй бит инде, ләкин әсәй ҡушылғанды барыбер эшләтә торғайны.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында бындай шөғөлдәр ҡайғыһы булманы, бер аҙ онотолоп та торҙо ул беҙҙең яҡтарҙа. Тик 2000 йылдар тирәһендә генә яңынан тергеҙҙек, дәмбер энәләре лә юҡ ине, ойоҡ энәләрен ҡулайлаштырып эшләп алып киттек. Әлеге ваҡытта беҙҙең "Тамбур" халыҡ студияһына 13 кеше даими рәүештә шөғөлләнә. Иң мөһиме, йәштәр ҡыҙыҡһынып килә, мәктәп уҡыусылары түңәрәккә бишенсе синыфтан алып йөрөйҙәр. Туҡыма, төҫлө ептәр һәм дәмбер энәһе булыуы шарт, шул энәне табып алыуы бер мәсьәлә инде. Күлдәк, алъяпҡыс, таҫтамал, намаҙлыҡ, ҡулъяулыҡ ҡайыйбыҙ, боронғо әйберҙәргә ҡарап та эшләйбеҙ, замансa күлдәктәргә килешле биҙәктәр ҙә сигәбеҙ. Биҙәктәрҙә беҙҙең яҡта үҫкән сәскәләр, үләндәр сағылыш тапҡан элек. Инәйҙәр яланда йөрөгәндә, бесән эшләгәндә бер сәскәне күрҙениһә, ҡайҙа шулайтып эшләйем әле, тип, тиҙерәк туҡымаға төшөрә һалған. Әсәйем дә шулай итә торғайны, "Бөгөн бик матур ләлә сәскәһен күреп ҡайттым әле, шуны ҡайып ҡуяйым", - тип тотона торғайны ҡул эшенә.

Әйткәндәй, ҡабартма ҡайыу еңел түгел, ул бик ваҡ, сабырлыҡ һәм иғтибар талап иткән шөғөл. Мәҫәлән, күлдәк итәген яйлап эшләһәң, айҙан ашыу ваҡыт китә. Гел генә ҡул эше менән ултырып та булмай, донъя мәшәҡәттәренән арынған саҡта ғына быға форсат табыла. Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙың ана шул ығы-зығынан арынып, үҙ көйөнә яйлап ҡына эш тотоп ултырыуы тынысландыра. Мин аралашып йәшәгән ҡатындар шуға бер юлы ике-өс әйберҙе ҡайый башлайҙар, сиратлап эшләһәң, ялҡытмай. Сифатлы, зауыҡлы ҡул эштәре юғары баһалана бөгөн. Беҙҙән заказ биреп тә төрлө әйберҙәргә зауыҡлы итеп ҡабартма ҡайытып алалар. Мәҫәлән, килен төшөргәндә морондоҡ инәй һәм морондоҡ атаһына бүләккә алъяпҡыс һәм таҫтамал эшләйбеҙ. Был беҙҙең төньяҡ-көнсығыш райондарында һаҡланған йола: килен булып төшкән ҡыҙҙың әсәһе йыраҡта ҡала бит инде, шуға уға кейәү яғынан берәй туғандарын морондоҡ инәһе һәм морондоҡ атаһы итеп алалар. Морондоҡ инәһе ҡыҙҙың үҙ әсәһенән ике-өс тары ярмаһына ғына еңелерәк тарта, ти. Бына шулай, үҙебеҙҙең боронғо йолаларҙы һәм шөғөлдәрҙе онотмаҫҡа, йәш быуынға өйрәтеп ҡалдырырға тырышып йәшәй "Тамбур" биҙәү-ғәмәли сәнғәте халыҡ студияһындағы ағинәйҙәребеҙ.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА**
**яҙып алды.**

---

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Бында анығ бер нәмә лә ҡушмайбыҙ, ул һүҙҙәрҙе үҙегеҙ, улар эстән урғығас табырһығыҙ. Әгәр был эште ихлас башҡарһағыҙ, шунда уҡ еңеллек тойорһоғоҙ, ләззәт кисерерһегеҙ. Шулай еңел генә үҙегеҙҙе ҡыйырһытыусыларҙы ғәфү итһәгеҙ һәм улар ҙа һеҙҙе ғәфү итһә, күңелегеҙҙә тыныслыҡ урынлашыр. Шул саҡта ысын тынығлыҡ табырһығыҙ, йәшлек образы асылығыҙ булып торор. Һеҙ уның менән ҡушылып, бер бөтөнгә әүерелерһегеҙ. Ҡарар ҡабул итеү ваҡытын һүҙмағыҙ. Асыҡлыҡ булмауы һәр саҡ ышанмаусылыҡҡа, тынғыһыҙлыҡҡа килтерә. Хис-тойғоларығыҙ өҫтөндә эшегеҙ һәр саҡ булдырыуға, төҙөүгә, үткәндәге, хәҙерге низағтарҙы хәл итеүгә һәм киләсәктә булдырмауға йүнәлтелергә тейеш.

Ни өсөн беҙ быны бик мөһим тип һанайбыҙ? Билдәле психолог Луиза Хей "барлыҡ ауырыуҙыр ғәфү итмәгәнлектән барлыҡҡа килә" тигән постулаттың хаҡлығын үҙ тәжрибәһендә раҫланы. Ә рәсми медицина бындай күренеш алдында көсһөҙ булды.

Әлбиттә, ғәфү итә белеү сәләмәтлек өсөн яҡшы. Белеүебеҙсә, уйҙар организмыбыҙҙағы матди үҙгәрештәрҙең йүнәлешен билдәләй. Бына ни өсөн киң күңелле булыу, барыһын да ғәфү итеү кәрәк. Шул уҡ ваҡытта иң мөһиме - үҙ-үҙегеҙгә һөйөү һәм ихтирам икәнен онотмағыҙ, юҡһа, шундай уҡ хис-тойғоно яҡындарығыҙға белдереү, бигерәк тә ғәфү итеү еңел булмаясаҡ. Үҙ-үҙеңде тәнҡитләмәүҙең, түбәнһетмәүҙең, әрләмәүҙең ни тиклем мөһим икәнен онотмағыҙ. Был үҙ-үҙеңде ихтирам итергә өйрәнеүҙең берҙән-бер ысулы.

Кемдән үҙегеҙ тураһында насар, кире фекер ишетеүегеҙҙе анализлағыҙ (дуҫтар, туғандар, эш буйынса коллегалар һ.б.) һәм уларҙан мөмкин тиклем арыраҡ булырға тырышығыҙ, барлыҡ аралашыуҙы туҡтатығыҙ. Әгәр был мөмкин түгел икән, уларҙы ғәфү итергә тырышығыҙ.

Үҙегеҙ тураһында бары тик ыңғай ғына уйлағыҙ һәм һөйләгеҙ. Нимәгәлер өлгәшергә теләһәгеҙ, эстән генә был хаҡта йышыраҡ ҡабатлағыҙ: "Мин үҙгәрергә теләйем", "Мин үткәндәремдән арынырға теләйем", "Мин - йәш һәм бәхетле!" һ.б. Быны көҙгөгә ҡарап 10 тапҡыр ҡысҡырып әйтһәгеҙ, тағы ла яҡшыраҡ.

Теләһә ниндәй хәл-торошта ла: транспортта, эштә, өйҙә көсөргәнештән арынырға, йәшлек образында даими булырға тырышығыҙ. Үҙегеҙҙе эмоциональ йәһәттән йәшлек образығыҙға тап килерлек итеп, ысынлап та бәхетле кеше итеп тойорлоҡ итеп көйләргә өйрәнегеҙ. Бәхетле кеше булығыҙ!

Хис-тойғоларығыҙ тулыһынса гармонияла булһа, интуицияғыҙ үҫешә башлаясаҡ. Беҙҙең системаның маҡсаты тап шунда ла инде:

- ауырыуҙарҙың сәбәбен табыу;
- ошо торошта сығыуҙың төп юлдарын күрһәтеү;
- ошо тигеҙлекте һаҡлау өсөн һайлау азатлығын биреү.

Ә был ысын мәғәнәһендә йәшлек һәм сәләмәтлек. Ошо хис-тойғоларҙы күнектерегеҙ, үҙегеҙҙе кәрәкле көйгә көйләргә өйрәнегеҙ.

**С. Кузина.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Чаныш. Сәлимов. Серенада. Бикбай. Шпрот. Лифт. Карнай. Яра. Ибраһимов. Ҡояш. Ау. ҡына. Мәрмәр. Вена. Йүрмә. Убыр. Ауыҙ. Носов. Әсир. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Шафиҡова. Сардар. Он. Турһыҡ. Сүре. Бизмән. Нуль. Ашлама. Айран. Ява. Охра. Актер. Рейс. Шторм. Ойоҡ. Банк. Әхмәтов. Ҡарға. Баян. Йөҙйәшәр.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV | V |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

БАҠСА

# ҠАР ТУЛТЫРЫП ҠАЛ!

**Ғинуарҙың ҡояшлы бер матур көнөндә теплицағыҙға ҡар тултырып ҡалығыҙ. Теплицаға ҡар нимәгә тиһегеҙме?**



Быға тиклем бер ҙә быны эшләмәгән булһағыҙ ҙа, теплица түтәлдәренә тығыҙламай ғына ҡалын итеп ҡар һалып сығығыҙ. Ни тиклем күберәк тултырһағыҙ, шул тиклем яҡшыраҡ. Ер артыҡ дымланып, һыуланып ятыр тип борсолмағыҙ. Ирегән һыу тиҙ һеңә.

Ҡышын "ял итеп" торған теплицала тупраҡ ныҡ кибә. Ул тығыҙлана, һыу, хатта һауа үтмәҫлек була. Бындай тупраҡ нескә тамырлы йәш үҫентеләргә бармай. Һыу һибеү ҙә хәлде яҡшыртмаясаҡ. Бындай тупраҡта орлоҡ насар шыта, үҫентеләр тамырланып китә алмай, шуға ла сибек булып үҫә. Шул тиклем тырышып та, теплица ҡуйып, уңыш ала алмаһаң, ҡыйын бит. Тупраҡты яңыртыу ғына хәлде ҡотҡара аласаҡ. Әммә яҙ һайын тупраҡ алыштырыу мөмкин түгел. Теплицаға ҡар тултырыу ярҙамға килә лә инде. Ғинуар аҙағына теплицала ер ярайһы туңа, унда ауырыу ҡуҙғытыусылар, ҡоротҡостар булмай. Әгәр ҙә ҡар һипһәң, туң ер бер аҙ ирейәсәк. Тупраҡ та кипмәйәсәк, уның тәбиғи төҙөлөшө һаҡлана. Дымдың иһә артыҡ булғаны ла юҡ. Ямғыр, ҡар һыуы үҫемлектәр өсөн шифалы ла. Мартта баҡса ултырта башлаған мәлгә теплица тупрағы ошо шифалы һыу менән туйынып торасаҡ.

21 ҒИНУАР - ҠОСАҠЛАШЫУ КӨНӨ

# ҺАУЛЫҠТЫ ЛА НЫҒЫТА, ИМЕШ

**Әхирәтемдең тыуған көнөнә barғайным. Кеше күп, әммә береһен дә белмәйем. Төрлө төбәктән, төрлө йәштәге ҡунаҡтар йыйылған. Алып барыусы тәүҙә ҡаушап ҡалған һымаҡ тойолдо, алкоголле эсемлекһеҙ мәжлесте беренсегә үткәреүе менән аҡланды ла хатта. Әммә үҙен тиҙ ҡулға алды. Алдан әҙерләгән сценарийын ситкә һалып ҡуйҙы ла, хужабикә тураһында бер нисә йылы һүҙ әйтеп, уны күкрәгенә ҡыҫты. Артабан юбилярҙы эргәһендә ултырған кешене ҡосаҡлауын үтенде.**

Шулай ҡунаҡҡа килгән һәр кем аяғүрә баҫып, күршеһен ҡосағына алды. Оҙаҡҡа һуҙылған кеүек булһа ла, был сара табындағылар араһында шул тиклем йылылыҡ, ихласлыҡ урынлаштырҙы. Һөҙөмтәлә байрам бик күңелле үтте һәм ҡунаҡтан бөтәһе лә дуҫ булып таралышты. Ҡосаҡлашыуҙың ҙур мәғәнәгә эйә булыуына ошо юбилей сараһынан һуң тағы ла ныҒыраҡ инандым.

Ғалимдар күптән инде кешене ҡосаҡҡа алғанда организмда бәхет гормоны бүленеүен иҫбатлаған. Окситоцин йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡан тамырҙарын нығыта, кортизол кеүек стресс гормонының барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Һуңғы йылдарҙағы тикшеренеүҙәр даими ҡосаҡлашыу артериаль ҡан баҫымын нормала торорға ярҙам итеүен дәлилләгән. Бынан тыш, яҡын кешенде ҡосаҡҡа алған ваҡытта организмда бүленгән гормон ауыртыуҙы ла баҫырға һәләтле булыуы билдәле. Шуға күрә, нисек кенә ваҡытыбыҙ тар булмаһын, бер-беребеҙгә бер нисә секундыбыҙҙы йәлләмәйек, йәмәғәт. Ҡосаҡлашыу икенсе яртыбыҙға, балаларыбыҙға, әсәй-атайыбыҙға кәрәкле булыуыбыҙҙы тойорға ла булышлыҡ итәсәк. Был иһә беҙгә бәхетле һәм уңышлы булырға көс бирәсәк.

**Әйткәндәй, психолог Наилә Әминева ла шулай ти: "Ҡосаҡлашыу кешенең кәйефен күтәрә, тынысландыра, үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоһо бирә. Ғалимдар хатта ошо ябай ғына ысул менән төрлө ауырыуҙарҙан дауаланырға була тигән фекергә килгән. Шуға күрә, яҡындарығыҙҙы, айырыуса балаларығыҙҙы көнөнә кәм тигәндә 10 тапҡыр ҡосағығыҙға алығыҙ".**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 ғинуар "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия 16+
**20 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), мелодрама 16+
**22 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+
**23 ғинуар "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+
**24 ғинуар "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин) 12+
**25 ғинуар "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22-23 ғинуар "Униженные"** (З. Биишева), драма 12+
**25 ғинуар "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 ғинуар "Лесная ярмарка"** (А.Рахманкулова) 12.00, 14.00
**20 ғинуар "Слоненок"** (Р. Киплинг) 12.00, 14.00 0+
**25 ғинуар "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев)19.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 ғинуар Марсель Ҡотоев "Төштәге йыр"** исемле мажаралы һәм хикмәтле тамашаһына саҡыра.

## Кем алыҡ?

1. М. Ҡотоев ниндәй йыры менән беренсе тапҡыр ҙур сәхнәгә сыға?
2. Филармонияла нисәнсе йылдан алып эшләй?
3. Йырсы ниндәй телдәрҙә йырлай?

Һорауға дөрөҫ яуап биреүсене концертҡа 2 кешелек саҡырыу ҡағыҙы көтә. Тел.: 89177701719

АФАРИН!

# МАТЕМАТИКАҒА ҺӨЙӨҮ ҘӘ...

## йырға һөйөү ҙә - күңелдә

(Башы 1-се биттә).

**Конкурс барышында башҡарған йырҙарҙың ҡайныныһы үҙеңә ныҡыраҡ оҡшаны?**

- Яуабым, бәлки, сәйер ҙә тойолор, әммә минә Ольга Бузованың "Мало половин" тигән йыры буйынса эшләү оҡшаны. Әйтергә кәрәк, быға тиклем йырсының ижады менән ҡыҙыҡһынмай ҙа инем, остазым тәҡдим иткәс, Евгений менән бергәләп йырҙы үҙгәртеп, яңыса оранжировка яҙыу ҙур тәжрибә мәктәбе булды. Остазым Сергей Шнуровҡа төрлө жанрҙағы йырҙар тәҡдим итеүе өсөн бик рәхмәтлемен, сөнки был тәжрибә һәм оҫталыҡты арттырырға, мөмкинлектәремде һынарға булышлыҡ итте. Күңелемә яҡҡан лирик йырҙар менән сикләнеп ҡалмаҫҡа кәрәк, тигән ышаныс уятты был тәжрибә.

**Әйткәндәй, остазың тураһында ла һөйләп кит әле. Беҙ белгән йырсы Сергей Шнуров һәм остаз Сергей Шнуров бер-береһенән айырыламы?**

- Йырсы булараҡ сәхнәлә үҙ-үҙен тотошо, образы - бер төрлө, ә тормошта ул бөтөнләй икенсе кеше. Сергей Шнуров йырлағанда әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡатыштырып та ебәрә, әммә беҙгә - өйрәнсектәренә, тик яҡшы мөғәмәлә генә күрһәтте. Ул кешелекле, асыҡ күңелле һәм һәр кемде аңларға, фекеренә ҡолаҡ һалырға әҙер кеше. Уның тынғыһыҙ рухы, сәхнәгә сыҡҡанда башҡаларҙың нимә әйтеүенән ҡурҡмайынса, үҙ юлын дауам итерлек көсө мине һоҡландырҙы. Шул һыҙат минә етмәгән кеүек тоям, шуға остазымдың иң төп девизы булған "Ҡурҡма!" тигән һүҙҙәрен бер ҡасан да онотмаясаҡмын. Һәр ваҡыт, һәр ерҙә, ниндәй генә ситуацияла булғанда ла үҙ юлыңдан тайпылмаҫҡа, үҙлегеңде юғалтмаҫҡа кәрәк, тип өйрәтте ул. Шуға күрә, тағы бер тапҡыр остазды яңынан һайлау мөмкинлеге бирелһә лә, ҡарарымды үҙгәртмәҫ инем: Сергей Шнуров иң шәп уҡытыусы! Әгәр ҙә жюрила элекке состав булһа, Дима Билан командаһында булырға теләр инем.

**Миллион тамашасылар алдында сығыш яһауыңды белеүе албырғатлыр, ҡурҡыуыңды нисек еңдең?**

- Былдай ҙур сәхнәлә сығыш яһауы ауыр, унда бер нисә минут эсендә бөтәһенең дә иғтибарын йәлеп итә белергә кәрәк. Әммә оҡшаған йыр булһа, уны башҡарғанда онотолоп китәһен, миллионлаған тамашасыларҙы ла тоймайһың, ни бары күңелеңдәге моңдо башҡаларға ла еткереү теләге менән янаһың. Ҡыҫҡаһы, остазымдың: "Һин "Беренсе" каналдың бер минуты ниҫаҡлы торғанын беләһеңме? Бында күпме аҡсаны елгә осороуыңды күҙ алдына килтер", - тип әйтеүе лә етте тулҡынланыуымды еңер өсөн.

**Был проект ҡалдырған хәтирәләр?**

- Иң яҡтыһы, әлбиттә, Сергей Шнуровтың һәр кешегә лә һөйләп булмай торған шаяртыуҙары хәтерҙә ҡалды. Ижадыма битараф булмаған тамашасыларҙың, яҡташтарымдың оло ярҙамы, проект сиктәрендә танышҡан асыҡ күңелле ижадташтарым менән аралашыу мөмкинлеге өсөн рәхмәтлемен.

**Киләсәккә ниндәй маҡсаттар менән йәшәйһең?**

- Үҙемдең йырҙарҙан торған музыкаль йыйынтыҡ сығарырға, тигән ниәт бар. Юғары уҡыу йортонда уҡыуымды уңышлы тамамларға һәм музыка донъяһында үҙ юлымды табып, күберәк ижад итергә, шәхес булараҡ үҫешергә теләйем.

**Төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарында һине хатта осетин ҡыҙы ла тип таныштырҙылар. Һинең тамырҙарың ысынында ҡайҙан?**

- Осетин ҡыҙы тигәндәре дөрөҫ түгел, әлбиттә, мин һәр ерҙә ғорурлыҡ менән "Мин Башҡортостандан, башҡорт ҡыҙымын!" тип әйтәм. Нәҫел тамырҙарым Ауырғазы районының Мостафа һәм Төрөмбәт ауылдарына барып тоташа. Бала саҡтан атай-әсәйем милли мәҙәниәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләп үҫтерҙе, башҡорт телен дә яҡшы белеүем, бөтә уңыштарым уларҙың ҡаҙанышы. Ағайым "Урал" башҡорт халыҡ йырын минең өсөн йырлай торғайны, гитарала уйнарға ла ул өйрәтте. Атайым да төрлө музыка ҡоралдарында яҡшы уйнай, үҙем скрипка буйынса музыкаль мәктәп тамамланым. Йырлағанымды төүге тапҡыр видеоға төшөрөүселәр ҙә яҡындарым, улар мине һәр ваҡыт хуплап, ҡанаттарымды үҫтереп кенә тора.

**Әммә буласаҡ һөнәрең музыка өлкәһе менән бөтөнләй бәйле түгел, "Юғары иҡтисад мәктәбе" милли-тикшеренеү университетында белем алаһың...**

- Теүәл фәндәр буйынса Берҙәм дәүләт имтихандары өсөн юғары балдар йыйҙым да, атай-әсәйем менән кәңәшләшеп, яҡшы башланған эште дауам итергә булдым. Минә программалау, математика фәне оҡшай, төндәр буйы ашамай-эсмәй уҡырға әҙермен, ә музыка - күңелдә. "Голос. Перезагрузка" проекты ваҡытымды дөрөҫ бүлергә, дисциплинаға өйрәтте, сөнки уның финалы сессия мәленә тура килде. Минә әле үҫәһе лә үҫәһе, ике өлкәлә лә уңыш ҡаҙаныу өсөн тырышып эшләргә кәрәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Билдәле һәм уңышлы йырсы булыу өсөн талант ҡына етәме?" - тигән һорауға әңгәмә барышында Рушана: "Билдәлелек, уңыш, абруй ҡаҙаныу өсөн бер урында тапанып тормаҫҡа, үҙ юлыңды эҙләп табырға кәрәк. Был проект мәлендә минең юлым бер төрлө һәм бик үк идеаль булмауына төшөндөм, әле мин эҙләнәм", - тигәйне. Оло тормошҡа әле генә аяҡ баҫып торған ун туғыҙ йәшлек талантлы яҡташыбыҙҙың ижад ҡомары һүнмәһен, киләсәктә үҙе эҙләгән юлды табырға яҙһын, тип теләйбеҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# КӘРҺЕҘ ҠАЛҺАҢ...

## ҡағылмайҙар ҙа, һуғылмайҙар ҙа

- Бахыр баҡыр тимә: баҡырға баҡкандың сире китер, хәсрәте кәмер, дәрте артыр.
- Арғымаҡҡа менгәшмә, үҙең өйрәт сабырға; тормошта ла шулай - үҙ юлыңды үҙең тап, кеше юлы мандытмаҫ.
- Кешегә ҡалған көнөң - атмаған таңың, үткәрә алмаған төнөң.
- Хәмер түгел күстәнәс, ул йоҙроҡло дөмбәс (ығы-зығы).
- Ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта.
- Ете ҡат йоҙаҡ менән бикләнгән хазина тиҙ юғалыусан.
- Ике аҡыллы кәңәшләшә, ике йүнһеҙ кәзәкләшә.
- Мөрхәтһеҙ күпкә лә ҡәнәғәтһеҙ, итәғәтле аҙға ла шатланыр.
- Етем тамыры ете ҡат - етемгә баш һалмағыҙ, үҙ тоҡомоң тамырына етемлек орлоғо һалмағыҙ. (Өләсәйем һүҙе).
- Теше сыҡмаған сабый ҡулындағы мәмәйгә ҡарай, тешен ҡаҡҡаны кемлегенде һынай.
- Етем ҡорһағы ете ҡат, туйһаң да ете өҙөп, ете ҡап, тәнеңә булыр йылы ҡат.
- Яңғыҙ кеше - яңғыҙ ҡайын: әсе елдәр бөтә яҡлап килеп бәрелә, йөрәген, тәнен әрнетә.
- Аслыҡта ейгән ҡойҡанды туҡҡа сыҡҡас онотма.
- Дауыл бәрелеүҙән тау һелкенмәй, ел һуғылыуҙан ғына имән эйелмәй.
- Шәп сағында дуҫ-иштәрең төрлө һүҙ менән тартҡылай, дошмандарың уҡ менән ҡаҡҡылай; кәрһеҙ ҡалһаң, алмаһы бөткән алмағасты һелкетмәгәндәй, ҡағылмайҙар, һуғылмайҙар.
- Үҙ ҡояшың балҡымаһа, күктәге ҡояш ҡына йылытмай шул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕГЕРМЕЛӘ ЕТЛЕКМӘГӘН...

## иллеһендә лә өйләнмәҫ

Илсе итеп эт ебәрһәң, иленә яу килтерер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше фәрештә лә, хайуан да түгел, һәм уның бәхетһеҙлеге шунда: ул ни тиклем фәрештә булырға ынтыла, шул тиклем хайуанға әйләнә бара.

**(Б. Паскаль).**

Өс кешене бергә йыйығыҙ һәм улар араһында һеҙ бер тиранды, уның бер фекерҙәшен һәм... бер ҡорбанды күрерһегеҙ.

**(П. Буаст).**

Тәбиғәт бер ваҡытта ла хаталанмай: әгәр ҙә ул был донъяға алйотто тыуҙырған икән, тимәк, шулай кәрәк булған.

**(Г.Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Арыҫлан, бүре һәм төлкө бергәләп һунарға барырға һөйләшә. Әлбиттә, арыҫлан был хәлгә әллә ни шатланмай, әммә баш тарта ла алмай. Бына улар бейек тау башына артыла. Һунар уңышлы килеп сыға, табыш - үгеҙ, кәзә һәм һимеҙ ҡуян. Табышты улар тау башынан төшөрөп, урман эсенә алып инә. Бүре менән төлкө бик ныҡ асыҡҡан була, табышҡа ҡарап, һеләгәйҙәре ағып китә хатта. Арыҫлан быны һиҙә һәм:"Мин һеҙгә үҙегеҙгә лайыҡлы өлөшөгөҙҙө бүлеп бирермен, һис шикләнмәгеҙ", - тип, ауыҙ эсенән генә мығырҙана. Шунан бүрегә ҡарап, шулай ти:"Һин, бүре, өлкәнһең һәм тәжрибәлеһең. Ошо табыштарҙы һәр беребеҙгә бүл һәм үҙеңдең ғәҙеллегеңде күрһәт". Бүре табышты үҙенсә шулай бүлә:"Хөрмәтле арыҫлан! Был ҡырағай үгеҙ һинеке булһын, әйҙә. Һин дә ҙур, үгеҙ ҙә ҙур. Уртаса ҙурлыҡтағы кәзә минеке булыр. Әй, төлкө, һин ҡаршылашмай ғына бынау ҡуянды ал..." Шунда арыҫлан асыулы үкереп ебәрә:"Әй, бүре, һин нисек минең алдымда "Был минеке, был һинеке", тип әйтә алаһың? Кил әле бында, ишәк..." Бүре яҡынлашыу менән арыҫлан уны һуғып осора. Шунан төлкөгә әйләнеп:" Йә, хәҙер һин ғәҙел итеп табышты бүлеп ҡара", - ти. Төлкө шулай ти:" О, бөйөк арыҫлан! Был һимеҙ үгеҙ һиңә иртәнге ашҡа булһын. Ә был кәзә һинең төшкө табыныңды биҙәһен. Ҡуян иһә киске ашҡа ҡалһын..." Алыҫлан бик ҡәнәғәт ҡала һәм һорай: "Әй, төлкө, һин был тиклем ғәҙел итеп бүлергә кемдән өйрәндең?" "Бынау бүренән һәм ул дусар булған һабаҡтан", ти төлкө.**

**Шуның һымаҡ, аҡыллы әҙәм күҙ алдында булған бәләләрҙән һығымта яһай белер. Мәҫәлән, фараондың халҡы, Ад ҡәбиләләре менән ни булғанын белгәс, байлыҡ артынан ҡыуыуҙан баш тарта, үҙҙәренең теләген һүндерә, ғорур һәм тәкәббер булыуҙан туҡтай. Әгәр байлыҡ артынан ҡыуыуҙы дауам итһәләр, улар осраған бәләнән башҡалар һабаҡ алыр ине..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 34